# Надежда Птушкина “Аҙашҡан ҡунаҡ” (Незваный гость)
# (Пока она умирала...)

Бер бүлмәле кес кенә фатир: ике ҡатын шунда ҡартая. Китап – журналдар менән тултырылған шкаф. Тәҙрәлә бантик ҡорғандар, түңәрәк өҫтәлдә суҡлы-суҡлы йәймә. Ҙур габаритлы ултырғыстар, абажур, ярым ҡараңғы бүлмә: унда хәҙер поэзия, моңһоулыҡ һәм һағыш таралған. Бүлмә өс шәм менән яҡтыртылған. Оло йәштәге Суфия (тубыҡтарын юрған менән япҡан) Нурия уға шиғыр уҡый.

Нурия (китапты ҡуйып)- Әсәй...һыҙланаһыңмы?

Суфия – Юҡ, юҡ, Нурияҡайым, борсолма.

Нурия – (бер аҙ уйланып) артабан уҡый.

Суфия ҡабат ауып ҡолай.

Нурия – (әсәһенә ҡарап) Артабан уҡырғамы?

Суфия – Был бик ауыр һорау.

Нурия – Һин тыңлап арыныңмы?

Суфия – Мин һинең менән һөйләшергә тейеш, Нурияҡайым, эйе тейеш.

Нурия – Алтмыш алтынсы бит (М.Кәрим) (китапты кәштәгә ҡуйып) Ашайбыҙмы?

Суфия – Әйт әле миңә Нурияҡайым, дөрөҫөн, тик дөрөҫөн әйт.

Нурия – Эйе, әсәкәйем!?

Суфия – Мин үлһәм һиңә еңелерәк булырмы?

Нурия – (әсәйен ҡосаҡлап) Әсәкәйем мин бик яратам! Һине, әсәй!

Суфия – Күпселек кешеләр, беҙ, өлкәндәр, үҙҙәренең был донъянан китеүҙәре менән яҡындарының хәлен еңеләйтәбеҙ тип уйлайҙар... Мин үҙемде улай тип йыуата алмайым. Мин үлһәм һинең тормошоң тағы ла күңелһеҙерәк булыр тип ҡурҡам.

Нурия – Һин үзеңде насарыраҡ тояһыңмы? Әсәй?

Суфия – Бәләкәсем минең, тик һин ҡурҡма, паникаға бирелмә... Бөгөн йә иртәгә мин үләм.

Нурия – Һин үҙ-үҙеңде өҙгөләйһең! Мин доктор саҡырам.

Суфия – Ваҡыт... Ваҡыт. Мин үлемдән ҡурҡмайым, мин күберәк һинең өсөн борсолам Нурияҡайым, һинең өсөн...

Нурия – Ә ни өсөн?

Суфия –Мин һинең яңғыҙыңды ҡалдырып китәм. Ирһеҙ, балаһыҙ яҡын кешеһеҙ. Һин иҫ киткес бала.  Ҡайҙа һуң ул ғәҙеллек? Нишәп һин тормош юлыңды яңғыҙ үтергә тейешһең? Ниңә!? Ниңә?!

Нурия – Әсәкәйем, донъяла минең кеүек яңғыҙ ҡарт ҡыҙҙар бик күп.

Суфия – Әйтмә шул һүҙеңде! Һин иҫ киткес! Буй-һының, төҫөң дә... Юғары белемең бар. Һин итәғәтле, һөйкөмлө, эшһөйәрһең. Насар ғәҙәттәрең дә юҡ.

Нурия – О! Әсәй был бит ҡарт ҡыҙҙың классик портреты! (күтәрелеп) Һиңә һоло йә дөгө буҡҡаһымы?

Суфия – Нурияҡайым, мин шаярмайым!?
Нурия – Мин дә шаярмайым, творогмы, әллә сырмы?
Суфия – Мин бер ҡасан да һинән һорағаным булманы.
Нурия – Күптән омлет ашағаныбыҙ юҡ... Ә юҡҡа...
Суфия – Һинең ҡиәфәтеңдән бер ни ҙә аңларлыҡ түгел.
Нурия – Йә, нисек, омлет турында!? Еңелсә ҡыҙҙырырлған, һарымһаҡ, ҡыҙыл помидор...
Суфия –Үлер алдынан булһа ла һорарға мөмкиндер бит? Минең өсөн был бик тә бик тә мөһим.
Нурия – Әлбиттә, әсәй, теләгәнеңде һора! Тик һин башта әсәй әйт, сәй яһарғамы, әллә кофемы?
Суфия – Һинең ҡасан да булһа ғашик булғаның булдымы?
Нурия – (күкрәген киреп) Әлбиттә! Мин бик тиҙ ғашик булыусанмын. Бынан бер э....э...э.. егерме биш йыл элек (Нурия салат һауытын әсәһе янына этә). Был алма менән кишер салатын һин һис шикһеҙ ашарға тейешһең.
Суфия – Ә һинең булдымы? Ә һинең уның менән булдымы бәйләнештәр?
Нурия – Нимә? Һин нимә әйтергә теләйһең?
Суфия – Э...э... әйтәйек...тик һин үпкәләмә. Әйтәйек ир заттары менән...
Нурия – Ҡыҙғаныс, әммә булды. Әлбиттә ир заттары менән. Тик һин әсәй борсолма, ул инде бик күптән булды.
Суфия – Ә күпме?
Нурия – Нимә күпме?
Суфия – Һуң теге бәйләнештәр?
(пауза)
Нурия – Ике...буғай...ҡаймағы етәме, әсәй?
Суфия – Ике!? Был ни арала һуң?
Нурия – Ике ул бөтә ғүмерем араһында.
Суфия –Ҡот осҡос, ике генә! Бары тик ике генә...
Нурия – Ә мин һан артынан ҡыуманым.
Суфия – Күптәнме?
Нурия – Күптән...
Суфия – Ә ниңә шул ике егеттең береһенә кейәүгә сыҡмайһың?
Нурия – Улар ниңәлер теләмәнеләр.
Суфия – Алйоттар (пауза) Нимә инде улар менән хәҙер?
Нурия – Белеүемсә, улар икеһе лә өйләнгән.
Суфия – Һин улар менән аралашмайһыңмы ни?
Нурия – Улар өйләнгәндән һуң юҡ, әсәй.

Суфия – Ә юкҡа... Айырылышҡан булыуҙары мөмкин, яңғыҙ ҡалыуҙары бар... Миңә ҡалһа улар һине хәтерләй. Һәм һиңә өйләнмәүҙәренә бик үкенәләр тип уйлайым.
Нурия – Мин улай тип уйламайым. Тәмлеме?
Суфия – (ҡалағын ташлап) Ә һин улар тураһында белешеп ҡараманыңмы?
Нурия – Юҡ, бер ҡасан да. Әсәй һин бөгөн бик насар ашайһың?!
Суфия – Әгәр ҙә һин кейәүҙә булһаң, мин бәхетле булып үлер инем. Мин ғәйепле, мин. Минең тиҫкәрелегем арҡаһында һин яңғыҙ ҡалдың.
Нурия – Ҡуй әле, әсәй, шаштырма. Тағы бер ҡалаҡ ҡына ҡап инде.
Суфия – Былдай ғазаптар менән үлеүе бик тә ауыр.
Нурия – Шулай ҙа мин докторҙы саҡырайым!?
Суфия – Доктор ғына мине тынысландыра алмаҫ. Әгәр һин кейәүҙә булһаң, мин был донъянан тыныс күңел менән китә алыр инем...

(ишек шаҡыйҙар)

Суфия – Шаҡыйҙар. Бик тә сәйер был.
Нурия – Нимәһе сәйер, күршелер, моғайын.
Суфия – Шылтыратмайҙар, ә шаҡыйҙар. Шуныһы сәйер.
Нурия – Өйҙә ут юҡ, әсәй (шәмде алып ишеккә бара)
Суфия – Барыбер сәйер. Кем икәнен һора!
Нурия – Кем унда!?
Булат – (ишек артынан) Ку-ку! Нурия... ку-ку..(шампанский менән роза сәскәләрен һуҙып) Сәләм!(яңлышҡанын аңлап)... Э апаҡай Нурияны саҡырығыҙ әле, зинһар!
Нурия – Мин... Нурия...
Суфия – (бүлмәһенән) Нурия кем унда?
Нурия – Хәҙер, әсәй, хәҙер.
Булат – Һеҙ үҙегеҙҙе Нурия тип әйтергә теләйһегеҙме?
Нурия – Эйе, мин үҙемде Нурия тип әйтә алам. Сөнки минең исемем Нурия!
Булат – Уныһын аңланым. Ә һеҙҙән башҡа бында Нурия юҡмы?
Нурия – Берҙән-бер.
Булат – Тәк. Асыҡлайыҡ әле... Автовокзал урамы, 13 йорт, 3 корпус, 31-се фатир. Шулаймы?
Нурия – 3 «Б»
Булат – Нимә?
Нурия – Корпус 3 «Б»
Булат – 3 «А»ла бармы?
Нурия – Әлбиттә, бар. 3 «В», 3 «Г» һәм хатта 3 «Д»ла бар.
Булат – Миңә хәҙер нишләргә инде?!
Бөтөн алфавитты йүгереп сығырға мени. Һәм һәр ваҡыт бишенсе ҡатты яуларға!? Ну был хрущовкаларҙы, лифтта юҡ бит!

Нурия – Ғәфү итегеҙ инде!

Булат – Ярай, апаҡай! Консультация өсөн ҙур рәхмәт. Ғәфү итегеҙ!(шампан менән сәскәләрҙе тартып ала) йәйәү йөрөү күптәнге хыялым ине. Ҡот осҡос ҡараңғы бында, Бәрелеп саҡ ауыҙҙы емермәнем. Нисек йәшәйһегеҙ һеҙ бында? Динозаворҙар! Нисек иҫән ҡалғанһығыҙ әле бында!?

Нурия – Мәгеҙ шәм алығыҙ! (Булат артынан эйәрә)

Булат – Рәхмәт апай! Миндә зажигалка бар! () Фу, шайтан, дөмөктө! Үлде, газы бөттө! Янмай!

Нурия – Тотоғоҙ шәмде! Һаҡ булығыҙ! Тайып йығыла күрмәгеҙ! Аяҡ аҫтына нимә генә ташламайҙар бына...

Булат – Урамға шәм күтәреп сыҡһам халыҡ нимә тип уйлар. Ыҫҡынған был тип уйлаясаҡтар бит, билләһи!

Нурия – Ҡараңғы ут юҡ, фонарҙа янмай!

Булат – Ярай, яҡшы! (ала шәмде) рәхмәт, һау булығыҙ!

Нурия – Хаҡ булығыҙ! (кире керәм ти, тайып йығыла) ай...ай...

Булат – Нимә булды, апаҡай?!

Нурия – (илап) Юҡ бер нәмәлә булманы...иғтибар итмәгеҙ!

Булат – Ярҙам итергәме?

Нурия – Юҡ,юҡ (көскә тора) ай...

Булат – (кире инеп) Нимә булды һеҙгә?

Нурия – Тайып йығылдым. Күрше малайы маймы кеүек гел банан ашай, ә ҡабыҡтарын подъезд иҙәненә ташлай...Тәрбиәһеҙ...

Булат – Бер ерегеҙҙә һынманымы? Һеҙҙең йәштә апай һөйәк һындырыу һүнгән усаҡ тоҡандырыу менән бер.

Нурия – (асыуланып) Барығыҙ! Миңә һеҙҙән ярҙам кәрәкмәй!

Булат – Нимә тип әйтәһегеҙ? Ныҡ бәрелдегеҙме? Өйҙәгеҙ күтәреп керетәм.

Нурия – Бөттө инде кәрәкмәй! (илай)

Булат – Ә ниңә илайһығыҙ?

Нурия – Илағым килә! Ғәфү итегеҙ! Әсәйем үлем хәлендә ята.

Булат – Ҡыҙғаныс... Бында инде мин көсһөҙ. Бында инде аҡса менән генә ярҙам итеп булмай...уйлап ҡараһаң...мәгеҙ алығыҙ (аҡса һуҙа)

Нурия – Һеҙ нимә? Аҡылдан яҙҙығыҙмы?

Булат – Ысын күңелдән... Беҙҙең барыбыҙҙың да ҡасандыр ата-әсәйҙәре булған.

Нурия – Мин һеҙҙән хәйер һорамаҡым

Булат – Минең өсөн был бер ниҙә түгел! Алығыҙ! Ысын күңелдән... Алығыҙ!

Нурия – Зинһар мыҫҡыл итмәгеҙ.

Суфия – (ҡысҡырып) Нурия! Нимә булды? Мин борсола башланым

Нурия – Киләм, киләм әсәй!

Булат – Мин һеҙгә ярҙам итергә теләгәйнем. Ә һеҙ тик торғандан ҡысҡыра башланығыҙ! Әгәр кәрәкһә. Мин үҙем дә бик яҡшы ҡысҡыра беләм! Пока!

Нурия – Ғәфү итегеҙ

Булат – Кире уйланығыҙмы? Дөрөҫ! Биргәндә – алырға кәрәк! Минең фекер шулай

Нурия – Юҡ, кәрәкмәй миңә һеҙҙең аҡсағыҙ! Ҡултыҡлап керетһәгеҙ булды...

Булат – Пожалуйста! Тотоноғоҙ минең ҡулға!

Нурия – Розалар менән шампанды мин үҙем тотам. Ә шәм һеҙгә ҡалһын...(Булат ҡултыҡлай, фатирға керәләр, абына-һөрөнә Суфия ҡаршыһына килеп баҫалар. Нурияла роза сәскәләре һәм шампан, Булатта шәм)

Суфия – Һаумыһығыҙ!

Булат – Һаумыһығыҙ! (аптырап)

Нурия – Әсәй... таныш бул...был...был...

Булат – Булат. Бик шатмын.

Нурия – Ә был...был...

Суфия – Һин нимә бөгөн бөтә кешенең исемен оноттоңмы, ҡыҙым

Нурия – Суфия ханым. Минең әсәйем.

Суфия – Һеҙ Нурия менән күптән танышмы?

Булат - (сәғәтенә ҡарап, шаяртып) Ну, бер 20-30 йылдар барҙыр инде.

Нурия – 30 йыл! Ваҡыт нисек тиҙ үтә, ә! Шулай бит, Булат!?

Булат – Ысынлап та, шулай...

Суфия – Мин бик шатмын. Ултырығыҙ, Булат! Булат тип кенә өндәшһәм ярайҙыр бит? Ни әйтһәңдә мин бит һеҙгә ҡарағанда күпкә олораҡ. Нурия! Нишәп һин ҡунаҡ килә тип алдан әйтмәнең. Кеше сәскәләр, шампанский күтәреп килгән! Ә һин... тиҙ генә берәй ризыҡ әҙерлә. Шампанскийҙы һоло буткаһы менән эсмәйҙәр. Зинһар, бирегеҙ әле миңә шул розаларҙы! Ах был розаларҙың еҫе! Ах, ниндәй хуш еҫлеләр! Мин үҙемде йәш, бәхетле итеп тоям хәҙер! Күптән беҙҙең өйҙә роза сәскәләре булғаны юҡ! Һалдыр Булаттан бәлтәһен! Йүгер кухняға! Ә беҙ был сибәр егет менән һөйләшеп ултырайыҡ!

Нурия – Бирегеҙ белтәгеҙҙе!

Булат – Ғәфү итегеҙ миңә китергә кәрәк...ваҡыт...ә...ә...(шампанды ала, розаларға теймәй)

Суфия – Асығыҙ шампанскийҙы! Кәрәк бит ә, ниндәй инсафлы, ниндәй итәғәтле кеше! Роза менән шампанский күтәреп килгән! Биш минутта ултырманы китергә лә тора! (һоҡланып) интеллигент! Юҡ, юҡ мин әле һеҙҙе ебәрмәйем! Һалығыҙ бәлтәгеҙҙе! Һалығыҙ! (Булат бәлтәһен сисә Нурияға бирә)

Суфия – Нимә ауыҙығыҙҙы асып ҡарап тораһығыҙ!? Бар әҙерлә нимә булһала. Ә беҙ Булат менән һөйләшә торабыҙ!

Нурия – Ҡурҡмағыҙ! Мин хәҙер инәм! (сыға)

Суфия – Нурия һеҙҙең турала бик күп һөйләне миңә

Булат – Минең турала? (аптырап)
Суфия – Эйе, эйе. Ул башҡа бер кеше тураһында ла һөйләй алмай.
Булат – Ниэшләп?
Суфия – Сөнки уның башҡа һөйләрлек кешеһе юҡ.
Булат – Һеҙ мине икенсе кеше менән бутайһығыҙ ахыры?
Суфия – Аяҡтарым йөрөмәгәнгә ҡарамағыҙ, минең башым һәйбәт эшләй, ул яҡтан барыһы ла тәртиптә.
Булат – Ғәфү итегеҙ, һеҙҙе үпкәләтергә теләмәгәйнем. Ә Нурия минең турала нимәләр һөйләне һуң?
Суфия – Гел яҡшы яҡтан һөйләй. Ул һеҙҙе бик тә ихтирам итә.
Булат – Шулаймы?
Суфия – Һиҙеп торам һеҙ үҙ-үҙегеҙгә бик үк ышанып етмәйһегеҙ ахыры. Юҡҡа! Эйе һеҙ тормошта бик күп яңылышлыҡ эшләгәнһегеҙ, бик күп хаталанғанһығыҙ! Ләкин ул ғүмер уҙған, бөткән! Әлегә бер ниҙә юғалтмағанһығыҙ. Алда һеҙҙе бик ҙур бәхет көтә.
Булат – Ниндәй бәхет?
Суфия – Билдәле, ғаилә бәхете. Башҡа бәхет булмай был донъяла.
Булат – Ә мин шәхси бәхетте өҫтөнерәк күрәм.
Нурия – (инә) Беҙҙең Булат шаярырға ярата...30 йыл шулай шаярта...бына... мандарин! Ҡалғаны йәшелсә (Булатҡа) һеҙгә нимә һалайым һоло бутҡаһымы? Витаминлы салат? Эремсекме?
Булат – Рәхмәт, мин мандарин ашар инем.
Суфия – Ир кеше мандарин менән генә сикләнергә тейеш түгел. Һеҙ бик оялсан кеше икәнһегеҙ! Нурия, һин Булатҡа күп итеп бутҡа һал.
Нурия – Шампанскийҙы асабыҙмы, юҡмы? (Булат аптырап китә) Нимәлер дөрөҫ әйтмәнемме?
Булат – (тартып) Һеҙ инде минән башҡа ғына, йәме! Танышыуыма бик шатмын! (бүлмәнән сығып ҡаса).
Нурия – Туҡтағыҙ (Булат артынан йүгерә).
Булат – (коридорҙа) Бында һеҙҙең тирәлә ҡайҙа сәскә һәм шампанский табырға була?
Нурия – Мин һеҙгә аҡсаһын хәҙер бирәм.
Булат – Миңә аҡса кәрәкмәй!
Нурия – Зинһар! (пауза) Ярты ғына сәғәт ултырығыҙ инде беҙҙең менән. Үтенеп һорайым. Унан һуң мин һеҙҙе үҙем кибеткә оҙатырмын. Әсәй өсөн! Әсәйем хаҡына! Ул бит үлем хәлендә!
Булат – Ғәфү итегеҙ! Мин доктор ҙа, мулла ла түгел!
Нурия – Мин барыһын да аңлайым, тик ярты ғына сәғәт!
Булат – (уйланып) Ярай. Тик мин телефондан шылтыратып алырға тейешмен. (Нурия инә. Булат телефон номерын йыя)

**БУЛМӘЛӘ**

Суфия – Был теге ике егеттең береһе инде...

Нурия – Əəəəə эйе тиһәндә була...

Суфия – Ə ҡайһыһы?

Нурия – Һуңынан, әсәй (Булат янына сыға). Һеҙгә уңайһыҙҙыр, бирегеҙ уҙем тотоп торам! (шәмде ала)

Булат – (телефондан һөйләшә) Алло! Нурия! Мин әҙ генә һуңлайым! Эйе, ярты сәғәттән килеп етәм! Мин? Кәңәшмәлә! Шулай, кинәт кенә килеп сыҡты инде, үҙем дә шат түгелмен! Алтыным, зинһар, асыуланма инде! Юҡ, юҡ оҙаҡ тормайым! Үбәм, ҡосаҡлайым! Ку- ку! (телефонды куя)

Нурия – Алтынығыҙ ҡайһы «кетәктә» ҡайһы корпуста йәшәгәнен һорарға ине!? (телефон шылтырата, Нурия телефонды алып) Тыңлайым! Юҡ, фатир. Кем йәшәй? Мин йәшәйем! Ə һеҙгә кем кәрәк һуң? Нимә? Нимә? (трубканы ҡуйып) барып еттек! Күрәһең һеҙгә шылтыраттылар.

Булат – Кем?

Нурия – Алтынығыҙ...

Булат – Шайтан! Уның телефоны определитель менән бит! Наҙан! Шуны ла онотҡаным! Нимә тине инде? Мыҫҡыл итмәнеме?

Нурия – Итте.

Булат – Нимә тип?

Нурия – Ғәҙәттәгесә.

Булат – Кисерегеҙ.

Нурия – Ə һеҙҙең бында ни ғәйеп?

Булат – Ул бик дәртле, темпераментлы ҡыҙ. Уға әле егерме биш кенә.

Нурия – Егерме биш? Һеҙ уның менән нимә тураһында һөйләшәһегеҙ?

Булат – Беҙ уның менән бөтөнләй һөйләшмәбеҙ. Беҙ...

Нурия –Егерме биш! Минән көнләшкән була бит әле!

Булат – Ул? Һеҙҙән? Һеҙгә шулай тойолған ғыналыр!

Нурия – Беләһегеҙме, миңә һеҙҙең менән һөйләшеүгә ҡарағанда, уның менән һөйләшеү күңеллерәк булды.

Булат – Уның бит һеҙҙе бер ҡасан да күргәне юҡ (телефон шылтырай) Алмағыҙ миңә ул.

Нурия –Ҡайһы саҡта миңә лә шылтыраталар...Был телефондан! (трубканы алып) Əә, Нурияҡай! Алтыным! Тыңлайым! Хәҙер йомшағым, мин уны саҡырам! Бирәм мә үҙенә бирәм алтыным! (трубканы Булатҡа бирә).

Булат – Нур... Нурияҡай...кем БАБНИК? Минме? Кемдең аяғы? Уның бөтөнләй аяғы юҡ! Фигураһы - таҡта!

Нурия – Нишләп булмаһын! Бар! (күрһәтеп) минең аяҡтарым бына тигән! Етмәһә фигурам да үҙ урынында, между прочим!
Булат – Кем блондинка? Уға бер иллеләр бар инде! Ант итеп әйтәм!
Нурия – Юҡҡа ант итәһегеҙ. Миңә 49 ғына!
Булат – Ну, Нурия...(трубканы ташлайҙар теге башта). Эх, нимә эшләнегеҙ инде һеҙ, ә!? Ә беләһегеҙме һеҙ мин уның артынан күпме саптым! (пауза) Ике аҙна! Шунан да кәм түгел! Булды, етте! (бәлтәһен ала)
Нурия – Китмәгеҙ! Әсәйемә нимә тип әйтермен?
Булат – Мин һеҙҙән ғарыҡ туйҙым: үҙегеҙҙән дә, әсәйегеҙҙәндә! (телефон шылтырай) Был миңә.
Нурия – Ҡағылмығыҙ минең өйҙәге телефонға! Был мине.
Булат – Ниңә?
Нурия – Һеҙ барыбер аңламайһығыҙ! (трубканы алып) эйе, был мин аяҡһыҙ...билһеҙ...илле йәштәге ҡыҙ...эйе мин Булатты үҙемә ҡаратырға теләйем.
Булат –Эй, апаҡай! Нимә һөйләйһегеҙ, ә? (телефонға йәбешә)
Нурия – Һеҙҙе түгел, мине һорайҙар, мине! Һеҙ ярҙам итегеҙ бына, шәм тотоп тороғоҙ! (Булатҡа шәм тоттора) Һеҙ Булат тураһында шундай насар фекерҙәме. Ә мин – бөтөнләй икенсе фекерҙәмен! Үҙе бик инсафлы, бик итәғәтле кеше. Ул бик сибәр! Кем минме? Рәхмәт! Мин ниндәй мени? Ну, уныһы улай уҡ түгел инде! Мин? Рәхмәт! Мин үҙем үҙемә ышана башланым. Шулай уҡ мени? Мин һеҙгә биктә рәхмәтлемен...Булатҡа бирәйемме? Әлбиттә... трубканы! Кәрәкмәй? Ах, һеҙ миңә шылтыратаһығыҙ мени? Мин бик тә шатмын! (трубканы ҡуя) Һеҙгә борсолмаҫҡа ҡуштылар. Алтынығыҙҙың барыр урыны ла, яратҡан кешеһе лә бар.
Булат – Һеҙҙең өйҙә ҡалыу ҡурҡыныс! (шәмде кире тоттороп номер йыя телефондан) ШАЙТАН!
Нурия – Нимә булды?
Булат – Яуап бирмәй. Нимә ҡыланаһығыҙ һеҙ, ә? Һеҙҙең йәштә...
Нурия – Ә нимә булған минең йәшкә!? Һеҙҙең үҙегеҙгә нисә йәш һуң әле?
Булат – Мин ир кеше
Нурия – Ә-ә-ә! Нимә ирҙәрҙең ике йылы бер йылға һаналамы әллә?
Булат – Ә күпме бирәһегеҙ һуң?
Нурия – Бер иллеләр барҙыр
Булат – (һөйөнөп) ДАА!?
Нурия – Ҡараңғы бында ныҡлап йөҙөгөҙҙө күреп булмай!
Булат – Беләһегеҙме...мин яңылыш һеҙҙең фатирығыҙға шаҡыным. Ә һеҙ тайып йығылдығыҙ. Мин һеҙгә үҙемсә ы-ы ирҙәрсә ярҙам иткән булдым...
Нурия – Биш минутҡа ғына ир-ат булырға ярамай ине. Бөтөнләй башламаҫҡа кәрәк ине. (Булат эсен тотоп ыңраша) Нимә булды?

Булат – Приступ! Гастрит!

Нурия – Нимә булһала ашарға кәрәк һеҙгә! Тиҙ генә! Һоло буткаһы! Эйе бына шул ғына һеҙҙе аяҡҡа баҫтырасаҡ!

Булат – Ярар бирегеҙ шул ҡалағығыҙҙы.

Нурия – (бүлмәгә һөйрәй Булатты) Тиҙерәк нығ ауыртамы?

Булат – Түҙерлек!

Нурия – Ултырығыҙ! Бына бутка! Ашағыҙ! (Булат ашай)

Суфия – Нурия, һин розаларҙы онотманыңмы?

Нурия – Юҡ, әсәй, онотманым

Суфия – Уларҙы вазаға ҡуйырға кәрәк.

Нурия – Ашағыҙ! Мин хәҙер. (розаларҙы алып сығып китә)

Суфия – Ашамағыҙ әле шул. Башта шампанскийҙы асығыҙ (Булат шампан аса, Нурия ваза менән розаларҙы алып инә)

Нурия – Нимә эшләйһегеҙ һеҙ?! Ашағы, шампанский кәрәк булған уға! (вазаны ҡуйып шампанды тартып ала)

Булат – (Нурияnан шампанды кире алырға теләп) Бирегеҙ! Үҙем асам!

Нурия – Нимә тип шул шампанскийға йәбештегеҙ әле һеҙ? Ашағыҙ! Мин уны үҙем дә асам! (шампан асылып китә Булатты ҡойондора) Уй ғәфү итегеҙ! Ҡиммәтле инеме?

Булат – Яңырткайным ғына!

Нурия – Ғәфү итегеҙ! Зинһар!

Суфия – Нурия эсә торған ғаиләнән түгел. Уның үҙ ғүмерендә араҡыға ҡағылғаны юҡ.

Нурия – Ғәфү итегеҙ!

Булат – Булды инде! Бокалдар бармы? (Нурия бокалдар сығара, Булат шампан һала)

Нурия – (бер бокалды алып ҡуя) Әсәйгә ярамай (икенсеһендә алып) һеҙгә лә ярамай, ә бына бынығына һалығыҙ! Мин эсәм!

Суфия – Ҡыҙым Булатҡа ла һал инде. Ул берҙә алкашҡа оҡшамаған.

Нурия – Шампанский һоло буткаһы менән! Мин һеҙгә тағы бутка һалайым, ә һиңә әсәй сәй...

Суфия – Сәй?

Нурия – Эйе сәй. Сәйеңә бер тамсы шампанский ҙа өҫтәйем. Ярай, әйҙәгеҙ эсәйек! Һеҙ сәкәштерегеҙ, ә мин эсәм.

Суфия – Ҡыҙым Булатта эсһен инде!

Булат – Минең өсөн борсолмағыҙ, мин эсмәйем

Суфия – Ниңә?

Булат – Мин рулдә.

Суфия – Рулдә? Һеҙ шофермы? Ах, ниндәй шәп профессия!

Булат – Юҡ, мин бухгалтер

Суфия – Бухгалтер һәм шофер

Булат – Бухгалтер ғына
Суфия – Ә нишәп рулдә? Бухгалтер, ә үҙе рулдә! Бик тә сәйер.
Булат – Минең машинам бар
Суфия – Үҙегеҙҙекеме?
Булат – Үҙемдеке. Ә кемдеке тағы булһын тағы?
Суфия – Ҡайҙан килгән һеҙгә машина?
Булат – Нисек ҡайҙан килгән?
Суфия – Ҡайҙан килгән һеҙгә ул машина тим?
Нурия – Урынһыҙ, килешмәгән һорауҙар бирмә әле кешегә, эсәй!
Суфия – Лотареяла оттоғоҙмо?
Булат – Юҡ.
Суфия – Атайығыҙҙан ҡалдымы?
Булат – Юҡ, һатып алдым
Суфия – Һатып алдығыҙ? Машина алыу еңел булмағандыр инде? Ғүмер буйы аҡса йыйғанһығыҙҙыр инде. Алаһы әйберҙәрегеҙҙе алмайынса.
Булат – Ундай ваҡыттарҙа булғыланы: тик, ни хикмәт, мин ул саҡта аҡса йыйманым. Ә хәҙер минең эш хаҡым бик яҡшы.
Суфия – Һеҙ, моғайын, бер нисә эштә эшләйһегеҙҙер. Үҙ-үҙегеҙҙе улай бик бөтөрмәгеҙ. Һеҙҙең йәшегеҙҙә бара бит.
Нурия – Мин эсергә тәҡдим итәм, дөрөҫөрәге һеҙ сәкәштерәһегеҙ, ә мин эсәм.
Суфия – Һеҙҙең өсөн Булат һәм Нурия был юлы барыһыла уңышлы килеп сыҡһын инде.
Булат – Бынан да уңышлыраҡ булмаҫ ахыры.
Суфия – Шәп әйттегеҙ! Һеҙҙең өсөн!
Нурия – Ух башҡа бәрҙе!
Суфия – Эсмәй эскәнгә шулай. Уңайһыҙыраҡ Булат шампанский эсмәй, ә геркулес менән закусывать итә.
Булат – Илле йыл геркулес ашаған юҡ. Бала саҡта әсәй көсләп ашата торғайны, геркулес ашаһаң баһадир булаһың тип. Юҡҡа тыңламағанмын. Баһадир булып булманы. Бик тә тәмле. Ярай әлегә һуң түгел. Тағы бер аҙ өҫтәгеҙ әле миңә һоло бутҡаһы.
Нурия – Тағын!
Булат – Эйе, добавка! Пионер лагерерында йөрөгәндә мин һәр ваҡыт добавка һорай торған инем апайҙарҙан.
Суфия – Һеҙ бик шәп ҡунаҡ! Аппетитығыҙ ҙа шәп һеҙҙең!
Булат – Өйҙә бешкән аштарҙы ашарға яратам мин. Яҡындарығыҙға ла мине шулайтып таныштырығыҙ.

Суфия – Нурия ҡыҙым, миңә һинең Булатың бик тә оҡшай. Ә һеҙ Нурияны нисек эҙләп таптығыҙ? Нисәмә тиҫтәмә йылдар үткәндән һуң?
Булат – Бәхет йылмайҙы.
Суфия – Шәп әйттегеҙ, ирҙәрсә. Һеҙ өмөт тә итмәгәнһегеҙҙәр инде.
Булат – Башыма ла килмәне.
Суфия – Ғүмеремдең һуңғы көндәрендә Хоҙайым миңә шулай бүләк бирер тип хис кенә лә уйламағайным. Алдан бер нимә лә белеп булмай шул.
Булат – Дөрөҫ! Бынан ике сәғәт элек берәйһе миңә «Һин ике итәғәтле ҡатын араһында һоло бутҡаһы ашап ултырасаҡһың» тип әйтһә, мин ҡысҡырып көлгән булыр инем.
Суфия – Ғәжәп тост! Күтәрәйек бокалдарҙы! Һин Нурия бөгөн өсөбөҙ өсөн дә эсәһең (эсәләр Нурия көлә башлай) минең Нуриям бөгөн шул тиклем бәхетле. Барыһы ла һеҙҙең арҡала Булат. Һеҙ бик күп йылдар күрешмәгәнһегеҙ, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, беҙҙең Нуриябыҙ үҙгәргәнме?
Булат – Үҙгәргән.
Суфия – Ҡайһы яҡҡа?
Булат – Яҡшы яҡҡа (Нурия тағы бер бокал эсеп ҡуя).
Суфия – Самалап эс ҡыҙым. Саманы шатлыҡта ла – ҡайғыла ла белеү кәрәк.
Булат – Һеҙ уны әле күп эсә тип уйлайһығыҙмы? Яңылышаһығыҙ. Бына бынан бер 30 йыл элек уның күпме эскәнен күрһәгеҙ! Ирҙәрҙе лә уҙҙырып ҡуя ине.
Суфия – Шулай эстеме ни. Ярар йәш саҡта булғылай ул.
Нурия – (аптырап) Нимә һөйләйһегеҙ һеҙ?
Булат – Элек булған хәл нимәһен йәшерәһең уның. Суфия ханым һеҙҙең ҡыҙығыҙ ҡыҙып алғас, кабакта өҫтәлгә менеп бейей торғайны, кабактағы бөтә халыҡ уға ҡул саба ине.
Суфия – Һин кабактарға йөрөнөң мени ?
Булат – Егеттәр артынан ҡалмайҙар ине, ә мин көнләшеүемдән шартлар сиккә етә торғайным.
Суфия – Халыҡ дөрөҫ әйтә. Әсәләр балалары тураһында һуңлап ҡына белә тип. Хәҙер мин аңланым, ни өсөн һеҙ ул ваҡытта Нурияға өйләнмәнегеҙҙе. Ышанығыҙ миңә, ул хәҙер үҙгәрҙе.
Булат – Ох белмәйем инде... Ох бер ҙә ышанырлыҡ түгел бит әле...
Нурия – Булат та бик үҙгәргән. Ҡыйыуланған. Ул миңә бөгөн тәкдим яһаны.
Суфия – Нурия ҡыҙым һин кейәүгә сығаһың! Булатҡамы? О был ниндәй ҙур бәхет!
Нурия – Мин әле уйларға тейешмен, әсәй!
Суфия – Нимәһен уйларға тағын?
Булат – Суфия ханым, был мәсьәләлә Нурияға баҫым яһарға ярамай. Нурия уйлаһын. Мин көтөргә риза.

Нурия – Рәхмәт, Булат! Беҙ был кисте бик матур ултырҙыҡ! Мин беләм, Булат бик ашыға, әсәй беҙ уны оҙатайыҡ.

Булат – Кәрәкмәй мине бер ҡайҙа ла оҙатырға. Минең барыбер барыр урыным юҡ. Әле мин эрәмсек тәмләп ҡарамағанмын, элекке ваҡиғалар иҫкә төшә башланы.

Нурия – Ғәфү итегеҙ, Булат! Әсәйемә тыныслыҡ кәрәк.

Суфия – Юҡ, ҡыҙым. Бына Булат арҡаһында нисәмә йылға беренсе тапҡыр тыныслыҡ тоям.

Нурия – Эгоист булмайыҡ әле, әсәй? Рәхмәт Булат! Ғәйеп итеп китмәгеҙ!

Суфия – Ниндәй ғәйеп! Барыһы ла һәйбәт. Бер-берегеҙгә пар килгәнһегеҙ. Булат, һеҙ ҡасан пенсияға сығаһығыҙ?

Булат – Мин әле пенсияға сығырға йыйынмайым. Артабан эшләргә уйлайым әле. Нимә эшләйем мин ул пенсияла.

Суфия – Пенсияла ниэшләргәме? Ой, беләһегеҙме, пенсия ул тормоштоң иң матур ваҡыты. Һеҙ пенсияла, Нурия пенсияла. Был бит романтика. Өйгә ер алырһығыҙ. Өй һалырһығыҙ. Беҙҙең Сбербанкта әҙерәк аҡсабыҙ ҙа бар. Нурия баҡсала ҡаҙыныр. Һеҙ тәбиғәт ҡосағында, өй һалырға ҡаршы мени?

Булат – Юҡ ҡаршы түгел. Минең өйөм бар инде.

Суфия – Һеҙҙең дачағыҙ ҙа бар мени? Ә ҡайҙа?

Булат – Канарала.

Суфия – Канарала? Ә ә нисә сотый, боролорлоҡ урыны бармы һуң унда?

Булат – Бар, бар.

Суфия – Ә өйөң бик бәләкәй түгелме?

Булат – Юҡ, бәләкәй түгел.

Суфия – Ә йылға, урман яҡынмы?

Булат – Йыраҡыраҡ шул.

Суфия – Ниэшләп һеҙ ундай урынға риза булдығыҙ, ни урманы, ни йылғаһы йыраҡ, ә баҡсағыҙҙа берәй нимә үҫәме һуң?

Булат – Үҫә әҙерәк.

Суфия – Кем ҡарай инде уны?

Булат – Бер кем дә, улар үҙҙәре үҫәләр.

Суфия – Ҡыҙыҡ ирҙәрҙе тыңлаһаң, үҙҙәре үҫәләр! Һәм нимә үҫә инде? Кесерткәнме?

Булат – Әфлисун ахры. Мин унда бик һирәк булам, ваҡытым юҡ.

Суфия – Әфлисууун?! Нисек әйттегеҙ әле Кана...ва...!? Ишеткәнем бар барын, тик ниндәй юлдан барырға икәнен иҫләмәйем.

Нурия – Испания ул, әсәй!

Суфия – Испанияла!? Йыраҡ бит. Нимәгә кәрәк ул? Ҡыйбат та.

Булат – Киреһенсә унда бар нәмәлә осһоҙ.

Суфия – Нурия, һин, берәй нимә аңлайһыңмы?

Нурия – Нимәлер аңлайым шикелле.
Суфия – Миңә лә аңлат әле.
Нурия – Аңлатырмын.
Суфия – Йә, Хоҙай, мин шул хәтле тормоштан артта ҡалғанмын. Беҙҙең заманда бер кемдә Испаниянан өй төҙөргә ер алмай торғайны! Миңә ҡалһа тормош алға бара.
Булат – Миңә ысынлап та китергә ваҡыт. Барыһы өсөн дә ҙур рәхмәт.
Суфия – Юҡ, Булат мин һеҙҙе былай ғына ебәрмәйем! Нурия ярҙам ит әле миңә. Һеҙ мосолманмы, Булат?
Булат – (аптырап ҡала)
Нурия – Һеҙ мосолманмы?
Булат – Әлбиттә, тыуғандан бирле.
Суфия – Бик һәйбәт, былайыраҡ килегеҙ! Ошонда тороғоҙ! Нурия «Көръән» китабын бир әле, (Нурия «Көръән» китабын бирә)
Суфия – Нурия, тор Булат янына.
Нурия – Тағы нимә уйлап сығарҙың, әсәй?
Суфия – Мин бер минут та ваҡыт әрәм итә алмайым. Мин һиҙенәм иртәгә теге донъяға китеүемде. Бәлки бер аҙнан үлермен. Бисмиллаһирр – ррәхмәнирр - ррәхим
Нурия – Әсәй...
Суфия – Бүлдермә. Балалар. Оҙон – оҙаҡ йәшәгеҙ, татыу йәшәгеҙ! Бәхетле булығыҙ. Минән һеҙгә фатиха.
Нурия – Әсәй.
Суфия – бүлдермә! Ҡатын-ҡыҙ өсөн был иң матур, иң гүзәл минуттар. Йыш иҫемә төшөрәм атайың менән беҙгә лә шулай никах уҡынылар. Атайың миңә балдаҡ бүләк итте. Хәҙер уны һалдырып та булмай инде. Шуның менән бергә күмерһегеҙ инде. Ә һеҙ никах уҡыуға нисек ҡарайһығыҙ?
Булат – Никахҡа?! Иҫ киткес!
Суфия – Булат, Нурия ҡарағыҙ уны өйләнешкәндә никах уҡытмайынса ҡалмағыҙ
Нурия – Ашығырға ярамай, әсәй, уйлап эш итергә кәрәк.
Суфия – Нурия бик тә ғорур ул, Булат! Ул бер ҡасан да ирҙәр артынан сапманы! Бер ҡасан да! Ә бына уның әхирәте, күҙ алдынан килтерәһегеҙме, нимә ҡылана ине!
Нурия – Әсәй, Булатты минең әхирәтем бер ҙә ҡыҙыҡһындырмай.
Булат – Юҡ, юк киреһенсә, мине бында барыһы ла ҡыҙыҡһындыра
Суфия – Нурия, һин яңылышаһың. Булат һине ысынлап та ныҡ ярата. Шуның өсөн уны барыһы ла ҡыҙыҡһындыра. Шулай. Нурияның әхирәте урамда барған берәй матур ир-егетте күреп ҡалһа, барған еренән тайып йығылған була. Шунан ул иргә «зинһар мине өйөмә хәтле итегеҙ әле үҙем ҡайтып етә алмайым» тип ялына башлай. Шулай итеп ул һигеҙ тапҡыр кейәүгә сыҡты. Ә минең Нуриям бер тапҡыр ҙа сыға алманы.

Бына шулай ҡатын-ҡыҙ ниндәй генә түбәнселеккә бармай. Ҡайсаҡ. Тик Нурия түгел. (пауза) Ә туй ҡасан? Туй үткәрәбеҙҙер бит. Артыҡ ҙур булмаһа ла, туй шатлығы кәрәк.
Нурия – Ашыҡмайыҡ әле, әсәй!
Суфия – Ашығырға әле кәрәкмәй, һуҙырға ла ярамай. Бер аҙнанан, нисегерәк булыр?
Булат – Беҙҙең бухгалтерияла йыллыҡ баланс отчеты башлана. Туйҙы ла, балансты ла бер күбәгә өймәҫкә ине...
Суфия – Әлбиттә, бергә өйөргә ярамай, ә отчетығыҙ ҡасан бөтә?
Булат – 1 мартта, ә-ә-ә унан һуң квартальный отчет 20 апрелгә тиклем, унан һуң...
Суфия – Күрә алмаҫмын инде. Һиҙәм теге донъяға китер ваҡыт етте. Ҡалһа бер ай ҡалғандыр.
Булат – Ярай, ярай, беҙ тип пландарығыҙҙы үҙгәртеп ҡуймағыҙ.
Нурия – Булат!
Суфия – Булат, әгәр мин үлһәм, мин үлде тип туйҙы бер йылға кисектереп тормағыҙ йәме.
Булат – Һеҙ нимә? Хәҙерге заманда кеше үлде тип кем туйҙы күсерһен ти.
Суфия – Һеҙ иртәгә иртән килегеҙ әле беҙгә. Барыһын да шунда хәл итербеҙ.
Нурия – Булмай! Иртәгә Булат командировкаға китә.
Булат – Мин командировкаға?!
Суфия – Нисә көнгә?
Нурия – Ярты йылға.
Суфия – Ә баланс отчеты нимә эшләй?
Нурия – Командировкала яҙып почта аша ебәрә.
Суфия – Әгәр мин булмаһам, Нурия һеҙҙең менән барыр ине. Һинең тормошоңда ҡыҙым мин ҙур йөк булдым инде.
Нурия – Мин уны менән бер ҡайҙа ла барырға йыйынмайым. Һин мине ҡайҙа ебәрергә уйлайһың?
Суфия – Ә ҡайҙа ебәрәләр һуң һеҙҙе?
Нурия – ТУНДРАҒА! Мәңгелек боҙға! Ҡырағай эттәргә ултырып йөрөргә, сей килеш балыҡ ашарға! Тереләй төтөн эҫенә тоҡсоғон усаҡ яҡтыһында уның отчет яҙғанын ҡарап ултырырғамы!
Суфия – Ташлағыҙ һеҙ ундай эште, Булат!
Булат – Кемдер эшләргә тейеш бит ул эштә.
Нурия – Булат миңә гел шылтыратып торасаҡ.
Суфия – Тирмәнәнме?
Нурия – Әсәй егерме беренсе быуатта йәшәйбеҙ бит.
Суфия – Булат, һеҙ хат яҙығыҙ! Мин әле лә иремдең яҙған хаттарын һаҡлайым. Әгәр ҙә ул ваҡытта телефон булһа, мин бөгөнгө көндә нимә һаҡлар инем.

(ҡапыл свет бирелә)

Булат – Утты һеҙгә төнгә ҡарай ғына бирәләрме? Ошондай матур кисә өсөн ҙур рәхмәт һеҙгә, Суфия ханым.
Суфия – Һаҡлағыҙ үҙегеҙҙе. Беҙҙең өсөн һаҡлағыҙ. Һеҙ бит миңә улым кеүек яҡын хәҙер.
Булат – Һеҙ ҙә үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ (Булат менән Нурия коридорға сығалар). Тағы бер аҙ торған булһам, һеҙ мине галактикаға оҙатырға ла күп һорамаҫ инегеҙ.
Нурия – Асыуланаһығыҙмы?
Булат – Юҡ-та! тик...
Нурия – Нимәгә? Тик?
Булат – Әсәйеңдең фатихаһын алып, һеҙгә өйләнергә һүҙ бирҙем. Көрьән китабы алдында ант иттем. Бына шул нәмә борсоп тора әле.
Нурия – Онотоғоҙ!
Булат – Онотторға? Алланың шаярғанын бер ҙә күргәнем юҡ әле.
Нурия – Һүҙ биргән имеш, мин ул вәғәҙәләрҙе тантаналы рәүештә кире алам.
Булат – Бигерәк тә еңел уйлайһығыҙ икән. Үҙегеҙгә ярты сәғәт тә тоғро булып ҡала алмайһығыҙ. Ни өсөн быға тиклем кейәүгә сыҡмағанығыҙҙы аңлай башланым булһа кәрәк.
Нурия – Һеҙ үҙегеҙҙе Көрьән китабы алдында һүҙ бирҙегеҙ тип уйлайһығыҙмы?
Булат – Әлбиттә. Мин бит һеҙҙең кеүек эсмәнем. Бер тамсы ла ҡапманым.
Нурия – Ул Көрьән китабы түгел ине.
Булат – Ә нимә ине һуң?
Нурия – Мостайҙың хикәйәләр китабы ине. Ә Мостайҙа минең уйлауыма юмор хистәре етәрлек..(Булат йүгереп барып китапты алып ҡарай, аптырай)
Нурия – Шунан, нисек?
Булат – Теге һеҙҙең һигеҙ тапҡыр кейәүгә сыҡкан әхирәтегеҙ, һеҙҙең менән сағыштырғанда фәрештә. Биллаһи!
Нурия – Миндә һеҙгә теге оҙон ботло һары сәсле ҡуянығыҙ менән бәхет теләйем һәм башҡа хайуандарығыҙға ла.
Булат – Рәхмәт! Һау булығыҙ!
Нурия – Хушығыҙ!
Булат – Иртәгә әсәйегеҙҙең хәлен белеп сығырмын.
Нурия – Кәрәкмәй, юҡка борсолмағыҙ.
Булат – Юк та... мин барыбер бында яҡында ғына булам. Әйткәндәй мин Нурияның йәшәгән корпусының номерын белә алманым.
Нурия – Белегеҙ, табығыҙ! Һәм шул йәш кенә оҙон аяҡлы ҡуянығыҙ менән шунда ғына ҡосаҡлашып ултырығыҙ.
Булат – Мин һеҙҙе нимә менәндер үпкәләттем ахыры.
Нурия – Юҡ һеҙ бөгөн иҫ киткес булдығыҙ.

Булат – Мин үҙемде бөгөн хатта джентелмен итеп тойҙом.
Нурия – Ярай, ҡуянығыҙға ҡайнар сәләм.
Булат – Әгәр ҙә мин башҡа һеҙгә килмәһәм, әсәйегеҙгә нимә тип әйтерһегеҙ икән. Мине катастрофала үлтерәһегеҙме? Әллә бандиттар бысағына тығырһығыҙмы? Әллә көтөлмәгән үлем, ауырыу уйлап табырһығыҙмы?
Нурия – Юҡ, мин улай ҡанһыҙ кеше түгелмен...йәшәгеҙ! Берәй нәмә уйлап табырмын әле. Миндә фантазия етәрлек.
Булат – Уныһына шикләнмәйем.
Нурия – Әсәйем минең кейәүгә сығыуымды теләй. Унан һуң яңғыҙ ҡалыуымдан ҡурҡа. Мин уның был өмөтөн өҙә алмайым.
Булат – Ә ниәшләп һеҙгә берәйһен тапмаҫҡа...яңғыҙ ҡалғансы тим.
Нурия – Йәш саҡта минең ундай мөмкинселегем булып та, күңелемдә мөхәббәт яратыу хисе тыумағас, мин кейәүгә сыҡманым. Ә хәҙер инде, был йәштә ғәфү итегеҙ.
Булат – Яҡшы, мин китәм. Һау булығыҙ. Мин һеҙгә тағы бер инеп сығырмын әле. мин бында яҡында ғына булам.
Нурия – Зинһар тағы килә күрмәгеҙ!
Булат – Мин һеҙгә шул тиклем оҡшаманым мени?
Нурия – Юҡ, киреһенсә һеҙ миңә бик тә оҡшанығыҙ.
Булат – Рәхмәт.
Нурия – Яҡшы кеше һеҙ! Розалар, шампанский. Ах нимәһен йәшерергә һеҙ бик мөләйем. Нимә һөйләйем, мин тулҡынланам әйткәндәй башым әйләнә, нимәгә кәрәк инде былар.
Булат – Миңә ысынлап та һеҙҙә бик оҡшаны. Әсәйегеҙҙә оҡшаны. Мин тағы уны килеп күрер инем.
Нурия – Юҡ, башҡаса килә күрмәгеҙ.
Булат – Телефонығыҙҙы яҙып алайым әле. Ваҡыт булғанда шылтыратырмын.
Нурия – Юҡ, кәрәкмәй.
Булат – Ә бәлки...
Нурия – Юҡ, кәрәкмәй.
Булат – Мин бары тик....
Нурия – Рәхмәт! Һау булығыҙ!
Булат – һау булығыҙ! (кире инеп) Былай ҡапыл сығып китеүе, минеңсә, йүләрлек кеүек.
Нурия – Һау булығыҙ!
Булат – Һеҙ ысынлап та шулай уйлайһығыҙмы?
Нурия – Эйе, шулай, һау булығыҙ!
Булат – Һеҙҙең менән танышыуыма бик шатмын.
Нурия – Мин дә бик шат.

Булат – Шулай...мин китәйемме?
Нурия – Һау булығыҙ! (әсәһенә) Әсәй һин нисек?
Суфия – Ҡот осҡос был ҡыҙым, ҡот осҡос (пауза)!!!
Нурия – Тимәк һин барыһынд а аңланың? Кисер мине, әсәй.
Суфия – Аңланым, шунда уҡ төшөндөм. Мин бит әле аҡылдан шашмаған.
Нурия – Ғәфү ит мине әсәй, һиңә яҡшыраҡ булыр тип уйлағайным.
Суфия – Нимә өсөн мин һине ғәфү итергә тейешмен. Һинең һуңғы бәхетең өсөнмө!?
Нурия – Һин нимә әйтмәксе булаһың, әсәй?
Суфия – Йәшермә ҡыҙым. Оялма. Күҙҙәреңдән күреп торам. Яратаһың һин уны, ул да һине ярата. Һеҙ бәхетле буласаҡһығыҙ Алла бирһә.
Нурия – Әй...рәхмәт әсәй!
Суфия – Ниңә илайһың әсәй?
Суфия – Йөрәгемдә таш ята минең!
Нурия – Ниндәй таш тағы?
Суфия – Һеҙҙең Булат менән бер ҡасан да балаларығыҙ булмай. Быға мин ғәйепле. Миңә һәр ваҡыт һинең менән рәхәт ине. Шуға һине кейәүгә бирергә һәр саҡ ҡурҡтым. Яңылыштым! Бөгөнгө көндө мин үлем түгел, ә ейән-ейәнсәрҙе ҡарап ултырған булыр инем. Бала булған ерҙә шулай күңелле бит ул. Уйын, көлкө. Барыһына ла мин ғәйепле, балалар тәрбиәләү урынына һин көнө буйы ҡарт ҡарсыҡ янында ултырҙың...
Нурия – Мин яратам һине, әсәй! Миңә рәхәт һинең менән!
Суфия – Ысын ҙур ғаилә булһа яҡшыраҡ булыр ине лә бит...кейәү, ейәнсәрҙәр...ниәшләп һуң беҙ шуларҙы һуңға ҡалып аңлайбыҙ (бик һуң төшөнәбеҙ)
Нурия – Әсәй, һиңә борсолорға ярамай. Валерьянка эс әле.
Суфия – Валерьянанан башҡа был тормошта һин миңә бер нимәлә бирә алмайһың. Булат иç киткес матур ир-егет! Ә һин шундай сибәрһең! Һин бик матур ҡыҙ бала табыр инең. Уға хәҙер утыҙ йәш булыр ине (илай) Нурия ҡыҙым кисер мине! Ниәшләп һин шул тиклем тыңлаусан ҡыҙ булдың икән?!
Нурия – (әсәйен ҡосаҡлай) Кисер, әсәй!
Суфия – Ниәшләп шул тиклем әсәйеңде яратаһың һин? Ниңә кәрәк ул?
Нурия – Ғәфү ит әсәй, ғәфү ит!
Суфия – Һинең кейәүгә сығыуыңа мин шул тиклем шатмын (илай).
Нурия – Миңә бер кемдә кәрәкмәй, әсәй!
Суфия – Аҡылдан яҙҙың мәллә?
Нурия – Әсәй!
Суфия – Мин бәхетле, ә һин...!
Нурия – Мин дә бәхетле, әсәй!
Суфия – Нишләп һуң беҙ шул тиклем бәхетһеҙҙәр?(илай)
Нурия – Барыһы ла һәйбәт буласаҡ.

Суфия – Мин һине ҡотлайым.
Нурия – Рәхмәт.
Суфия – Мин һиңә теләйем...
Нурия – Әсәй!
Суфия – Һин бәхетлеме?
Нурия – Әлбиттә, бәхетлемен әсәй!

## БЕРЕНСЕ КАРТИНА БӨТТӨ.
## ИКЕНСЕ БҮЛЕК

***Нурия китап укый, Суфия ҡаты көрһөнөп ҡуя.***

Нурия – Мостайҙы тыңларға, бөгөн кәйефең юҡмы әллә, әсәй!
Суфия – Юҡ, ташла. Ниндәй матур розалар! Яҡыныраҡ этеп куй әле шуларҙы
Нурия – 65-се бит (китапты һалып ҡуя)
Суфия – Ашайбыҙмы?
Нурия – Һинең ашағың киләме?
Суфия – Ә ниңә беҙ берәйһен көтәбеҙме?
Нурия – Кем килһен беҙгә!
Суфия – Бөгөн һиңә ҡарап тороуы ла күңелле! Алһыу бант таҡҡанһың! Өләсәйеңдең өләсәһенән ҡалған бант бит ул. Ул һиңә бик килешә, йәшәреп, матурланып киттең. Был бантҡа инде бер нисә быуат. Миңә ҡалһа бөгөн бик мөһим көн.
Нурия – Ниңә? Ошо бант өсөнмө?
Суфия – Бант өсөндә! (бант арҡаһында ла) ҡара әле өйгә ниндәйҙер серле йәм инде. Көнө буйы ашарға бешерҙең. Нимә көтә беҙҙе, ә?
Нурия – Билмән, венегрет, торт...
Суфия – Ә Булат киттеме?
Нурия – Ул хәҙер йыраҡта инде.
Суфия – Бер нимә лә аңламайым (ишек шаҡыйҙар) Һин шулай ҙа кемделер саҡырғанһың.
Нурия – Сюрприз!
Суфия – Булатмы?
Нурия – Юҡ-юҡ!
Суфия – Кемде һуң?
Нурия – Әҙ генә түҙ! (ишекте аса, ишек артында Булат, розалар һуҙа Нурияға)
Булат – Хәйерле кис! Был һеҙгә!
Нурия – (розаларҙы алмайынса) Һеҙ бит командировкаға киттегеҙ. Оноттоғоҙмы?

Булат – Ишетмәйһегеҙме ни? Ана подъезд төбөндә егелгән эттәр өрөп торалар. 15 минуттан тунға уранып сумам да, тундраға елдерәм. Ә бында инде кәләшем менән хушлашырға тип килдем.
Нурия – Хәйерле юл!
Булат – Мин бер аҙ торайым, ял итәйем. Юлға сыҡҡансы. Йәш барыбер үҙенекен ала. Әсәйегеҙҙең кәйефе нисек? Әйткәндәй, был розалар уға (Нурияға розалар һуҙа).
Нурия – Рәхмәт (алмайынса), кисәгеләре лә һулымаған әле.
Булат – Алығыҙ. Күберәк булһын!
Нурия – Был розаларығыҙ менән алтынығыҙҙы иркәләгеҙ йәме?
Суфия – Нурия! Кем унда?
Нурия – Бер кемдә юҡ, әсәй, бер кемдә!
Булат – (ҡысҡырып) Суфия ханым был мин.
Суфия – Ниңә һеҙ инмәйһегеҙ, Булат?
Нурия – Ул бит ашыға, әсәй.
Булат – Һеҙҙе күрергә тип ашығам, Суфия ханым!
Суфия – Ашыҡҡас инегеҙ! Инегеҙ бында!
Булат – Инәм! Инәм!
Нурия – Оҙаҡ тормағыҙ зинһар! (Булат Суфияға бара ҡулын үбә, розалар бирә).
Булат – Был һеҙгә!
Суфия – Һеҙҙең килеүегеҙгә мин бик шатмын. Нурия миңә алдан әйтмәне. Ә шулай ҙа мин һиҙендем. Нурия бик ныҡ көттө һеҙҙе. Бик күп әйберҙәр һатып алып ҡайтты. Көнө буйы бешеренде, әҙерләнде. Һеҙҙән башҡа киске ашҡа өҫтәлгә ултырырға ла теләмәне.
Булат – (Нурияның ҡулын үбеп) Мин бик шатмын Нурияҡай. Мине көткәнегеҙ өсөн!
Нурия – Мин һеҙҙе көтмәнем.
Суфия көтмәнең? Ә кемде көттөң һуң?
Нурия – Мин һеҙҙе киткән тип уйланым. Аптыраным.
Булат – Аптыраның?
Нурия – Аптыраным?
Суфия – Булат һалығыҙ бәлтәгеҙҙе, үҙ өйөгөҙҙәге кеүек хис итегеҙ. Нурия розаларҙы вазаға ҡуй.
Нурия – Беҙҙең өйҙә бер генә ваза.
Булат – Аңланым иртәгә үк икенсе ваза тотоп килермен.
Нурия – Ә был розаларҙы нимә эшләтергә?
Булат – Ташлағыҙ.
Суфия – Ғашиктар! Әрләшмәгеҙ! Нурия, ал әле розаларҙы, командировкағыҙҙы кисектерҙеләрме ни?
Булат – Бөтөнләй булмай.
Суфия – Төшөм тура килде. Төштә оҙон юл күрҙем, юл уртаһында бер өйөм...

Булат – Күҙ алдына килтерәһегеҙме миндә нәк шундай төш күрҙем. Оҙон юл һәм бер өйөм... ышанаһығыҙмы?
Суфия – Нурия ишетәһеңме, беҙ Булат менән икебеҙ ҙә бер төрлө төш күргәнбеҙ.
Нурия – Ниндәй төш инде ул?
Суфия – Бына ошондай төш инде ул!.. оноттом. Ә бына Булатҡа ҡарағайным шунда уҡ иҫемә төштө!
Нурия – Ҡыҙыҡ бер төрлө ниндәй төш һуң ул?
Булат – Суфия ханым һөйләмәгеҙ, был беҙҙең бәләкәй генә сер булып ҡалһын.
Суфия – Иҫ киткес! Төштә яҡшыға булды, Булатта килде! Әйҙәгеҙ ултырайыҡ киске ашҡа!
Нурия – Ҡыҙғанысҡа ҡаршы Булат поездҡа һуңлай!
Суфия – Әйтегеҙ инде Булат, уны ниндәй шатлыҡ көткәнен.
Булат – Күҙ алдына килтерәһеңме Нурия, командировка бөтөнләй булмаясаҡ.
Суфия – Яңы йылды бергәләп ҡаршы аласаҡбыҙ.
Булат – Нурия, әле мине саҡырманы.
Нурия – Яңы йылға тиклем әле йыраҡ.
Суфия – Бер аҙна ҡалды. Саҡыр тиҙерәк Булатты! Уйлап ҡараһаң ниңә уны саҡырырға!
Нурия – Ысынлап та ниңә?!
Суфия – Әлбиттә! Булат бит хәҙер үҙебеҙҙеке!
Нурия – Ҡыҙғанысҡа ҡаршы Булат яңы йылды беҙҙең менән ҡаршы ала алмай.
Суфия – Ниңә?
Нурия – Ул яңы йылды коллектив менән ҡаршылай. Коллегалар менән корпоратив. Йола. Булат беҙҙе телефон аша ғына ҡотлар.
Суфия – Һинеңсә был яҡшыраҡмы? (ярайһымы?)
Нурия – Донья үҙгәрҙе, әсәй! Һуң баҡсаға ла бит ерҙәрҙе хәҙер Испаниянан бирәләр, ә яңы йылды хәҙер коллектив менән ресторанда ҡаршы алалар, оҙон ботло ҡуянҡайҙар, бесәйкәйҙәрҙе саҡыртып....
Суфия – Ә ҡуяндарҙың бында ни ҡыҫылышы бар? Булат, һеҙ зоопаркта эшләйһегеҙме?
Булат – Киттем мин унан бөгөн.
Суфия – Ә баланс отчеты менән нимә?
Булат – Зоопаркта ваҡытлы ғына эш булды, төп эшем икенсе!
Суфия – Һеҙҙең тормошоғоҙ ҙа бик еңел түгел. Һеҙгә тиҙ арала өйләнергә кәрәк.
Нурия – Булат! Иҫегеҙгә төшөрөргә мәжбүрмен һеҙгә китергә ваҡыт.
Булат- Командировка кисектерелде бит инде, Нурия?!
Нурия – Балансовый отчет ҡалды. Барығыҙ Булат отчетһыҙ ҡайтмағыҙ (Булат эсен тота уфылдай).
Суфия – Булат, нимә булды һеҙгә.

Булат – Нурия белә ул!
Нурия – Гастрит.
Булат – Бер генә киҫәк икмәк бирһәгеҙсе! Нимә булһа ла ҡабырға кәрәк. Үлтерә. Уй, ауырта!
Суфия – Нимә тип ҡатып ҡалдың (тораһың) тиҙерәк өҫтәлгә ҡуй (Нурия сығып китә).
Булат – Миңә хәҙер...һелкенергә лә ярамай. Ултырырға...бары тик ултырырға. Бер биш сәғәт, унан да кәм түгел.
Суфия – Ултырығыҙ! Беҙ бик шатбыҙ! Мин Нурияны бөгөн бөтөнләй аңламайым. Ни булды уға?
Булат – Ә мин бер нимә лә һиҙмәйем.
Суфия – Көттө-көттө һеҙҙе. Ә һеҙ килгәс, әллә нимә булды уға, күңеле төштө. Нимә эшләй ул унда? Булат бәлки кухняға хәтле үҙегеҙ барып етә алырһығыҙ.
Булат – Барып ҡарайым. (кухняға керә)
Нурия – Бында инеүегеҙ һәйбәт булды. Ултырығыҙ! Мин хәҙер һеҙҙе ашатам да тиҙ-тиҙ генә...
Булат – Борсолмағыҙ, мин бер ҡайҙа ла ашыҡмайым. Был бант һеҙгә килешеп тора. Вкус бар инде үҙегеҙҙә.
Нурия – Күп һөйләнәһегеҙ! Ашығыҙ тәмле булһын. Билмән, венегрет, бер киҫәк сыр.
Булат – Ә нишәп һеҙ барыһында бер тәрилкәгә тултырғанһығыҙ? Минең менән улай ярамай.
Нурия – Тәрилкә ҙур, барыһы ла һыя.
Булат – Ә ниңә һеҙ мине кухняла ашатаһығыҙ. Был минең абруйымды төшөрә.
Нурия – Ашағыҙ тиҙерәк!
Булат – Ә ниэшәп һеҙ мине һаман ашыҡтыраһығыҙ! Минең нервым сыға башланы.
Нурия – Мине һеҙҙең гастритығыҙ борсой.
Булат – Минең шәхес гастрит менән генә сикләнмәй. Әйткәндәй бик тәмле. Күптән былай тәмле итеп ашағаным юҡ ине.
Нурия – Тағы һалайыммы?
Булат – Рәхмәт! Әлегә етеп торор. Ҡурҡам ашап туйырмын да теге бүлмәгә сыҡҡас, алйот кеүек ҡарап ултырырмын һеҙҙең ашағанығыҙҙы.
Нурия – Әйтегеҙ, минән һеҙгә нимә кәрәк.
Булат – Дөрөҫөнмө?
Нурия – Әлбиттә.
Булат – Әгәр дөрөҫөн...мин үҙем дә белмәйем (телефон шылтырата) Мин юҡ!
Нурия – Нимә, хәҙер һеҙгә бында шылтырата башланылармы инде?
Булат – Юҡсы мин былай ғына.
Нурия – (трубканы ала) Тыңлайым! Һайрауығыҙҙан таныным: Булатмы? Әлбиттә, бында. Бында булмай ҡайҙа булһын тағы! Мәгеҙ һеҙҙең оҙон ботло ҡуянығыҙ.

Булат – Һеҙҙең холҡоғоҙ ҡот осҡос!
Нурия – Килешәм, кейәүгә сыҡмаған ҡарт ҡыҙҙың холҡо.
Булат – (телефонды алып) Эйе – эйе? Ку-ку!
Нурия – Ҡуян кәкүк булып ҡысҡыра, бөтөнләй экология боҙолдо.
Булат – Бөгөн? Әйтә алмайым бәлки... тырышырмын... юҡ, юҡ минең арҡала пландарыңды боҙма. Бараһы ерең бар икән бар. Ә мин нисек тә булһа шалтыратырмын. Пока – пока! Ҡосаҡлап үбәм ҡуяным минең.
Нурия – Иҫегеҙгә төшөрәм! Был һеҙгә һөйләшеү пункты түгел. Миңә шылтыратырға тейештәр.
Булат – Һау бул ҡуяным! Белмәйем шылтырата алырмынмы – юҡмы. Бында сират ҡуяным...эйе мин автоматтан шылтыратам.
Нурия – (Булатҡа пальто кейҙереп) Тиҙерәк ҡуяныгыҙға таяғыҙ! Ул көтә һеҙҙе! Ә миңә килергә тейештәр.
Булат – Ҡуяным минең, мин һиңә үҙем шылтыратырмын (трубканы ҡуя), ә кем килә һеҙгә? Ирлеккә – яңы кандидат. Ләкин һеҙҙең әсәйегеҙ миңә эҫенеп өлгөрҙө. Мин сығып китһәм уға бик ауыр буласаҡ, ә уның күңеленә травма яһарға ярамай! Әйткәндәй, минең белгем килә, ҡайһы ерем менән яраманым һеҙгә? Иң мөһиме әсәйегеҙ мине бик яратып өлгөрҙө.
Нурия – Һеҙгә минән нимә кәрәк? Хәҙер миңә килергә тейештәр. Һеҙ бында артыҡ. Һеҙгә минән нимә кәрәк?!
Булат –Бер нәмә лә. Миңә оҡшай һеҙҙәге абажур, өҫтәл тулы өй ризығы. Аңлайһығыҙмы туйҙым, ресторандан – ресторанға йөрөргә. Һеҙҙең әсәйегеҙ кеүек минең өсөн бер кем дә шатланғаны юҡ. Ә дөрөҫөн әйткәндә мин үҙ ғүмеремдә бер тапҡыр ҙа кейәү булғаным булманы!
Нурия – Улай булғас өйләнегеҙ ҡуяныгыҙға.
Булат – Уның өсөн мин бик йәшмен.
Нурия – Һеҙ? Уның өсөн йәш?
Булат – Әлбиттә. Минең әле тағы бер егерме йыл ғүмерем бар. Ә ул кейәүгә сығып шунда уҡ тол ҡалырға хыяллана.
Нурия – Ни өсөн кәрәк булды ул, һеҙгә?
Булат – Нисек ни өсөн? Мин бит ир кеше.
Нурия – Аңланым.
Булат – Юҡ. Һеҙ мине дөрөҫ аңламаныгыҙ. Күҙ алдына ғына килтерегеҙ. Эштә ултырабыҙ: коллегалар береһен мин кисә үҙемдең бер иҫ киткес һылыуҡайҙан интервью алдым...тигән була, икенсеһе «ә мин бер һылыуҡайҙы алып ҡайттым да...»
Нурия – Мин аңланым фекерегеҙҙе.
Булат – Ғәфү итегеҙ! Ә мин нимә һәр ваҡыт шым ғына ултырырға тейешмен ме?

Нурия – Ә һеҙгә һөйләргә кем ҡамасаулай һуң? Нимә теләйһегеҙ – шуны һөйләгеҙ. Мин бында түгел.
Булат – Ысынлап та һеҙ бик дөрөҫ кәңәш бирәһегеҙ, рәхмәт!
Нурия – Ә хәҙер китегеҙ! (барығыҙ)
Булат – Юҡ, мин бер ҡайҙа ла китмәйем. Мин бында ултыра бирәм.
Нурия – Шәхси тормош бер һеҙҙә генә бар тип уйлайһығыҙмы?
Булат – Ҡыҙғанысҡа ҡаршы миндә генә юҡ инде ул.
Нурия – Ә кемдә бар.
Суфия – Нурия беҙ бөгөн ашайбыҙмы, юҡмы?
Нурия – Хәҙер, әсәй, хәҙер!
Булат – Суфия ханым, хәҙер килтерәбеҙ! (Нурияға алып) алдыҡ!
Нурия – Китегеҙ хәҙер уҡ!
Булат – Салат менән бергәме?! Һеҙ нимә, мин әҙәпле кеше!
Нурия – Салатты бүлмәгә! Кухнянан сығаһы булмағыҙ!
Булат – Тыңлайым.
Нурия – Нимә тип ҡатып тораһығыҙ? Барығыҙ!
Булат – Ҡыҙыҡ, белгем килә, һеҙгә кем килгән.
(ишек шаҡыйҙар)
Булат – Ә ниңә асмайһығыҙ? Мине күрһәтергә оялаһығыҙмы? Әйткәндәй, кем тип таныштырырһығыҙ. Кейәүегеҙ тип, әллә фектив кейәүегеҙ тип, әллә элекке кейәү типме? Эй буталып бөттөм инде! Алдан һөйләшәйек (килешәйек) (ишек шаҡыйҙар). ниндәй ныҡыш. Был әҙәм ысынлап та һеҙгә ныҡлы өйләнергә теләй.
Нурия – Был эш буйынса. Собестан.
Булат – Бәлки миңә лә Собесҡа эшкә күсергәлер. Уларҙы нисек кенә әҙерләнеп көтөп алалар (Нурия ишек аса, осоп Динә килеп инә).
Динә – Әсәкәйем! Ҡәҙерлем минең! Был мин һинең ҡыҙың Динә. Берҙән бер балаҡайың! Эй һағындым һине.
Булат – Әсәй мәрхүм әйтә, торғайны «Күп һайланһаң балалы ҡатынға барып элеккәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалырһың» тип.
Суфия – Нурия ни булды? Ниндәй тауыш унда? (Динә Булатты этә төртә бүлмәнән Суфияның муйынына аҫылына)
Динә – Өләсәйем! Ҡәҙерлем! Иҫәнме!
Суфия – Нурия! Ярҙам ит! Ҡоткарығыҙ!
Нурия – Улай ярамай, әкрен!
Суфия – Кем был Нурия? Һин уны таныйһыңмы? (Динә тағы Суфияны ҡосаҡлап үбә башлай)
Динә – Өләсәй! Өләсәйем! Танымайһыңмы ни?
Булат – Сығарып ташлайыммы әллә?

Нурия – Был минең ҡыҙым, һинең ейәнсәрең, әсәй!
Динә – Әсәкәйем! Бергенәм! Өләсәйем! Ҡәҙерлем! (Суфияны ҡосаҡлай)
Нурия – Һиңә күпме әйтергә була! Аҫылынма бер кемгә лә!
Суфия - (ҡысҡырып) Ҡысҡырма балаға! Кем был? Мин бер нимә лә аңламайым! Йөрәгем шул тиклем ҡаты тибә. Ыҙалатма мине Нурия әйт кем был?
Нурия – Һинең ейәнсәрең! Минең ҡыҙым, йәшергәнем өсөн ғәфү ит.
Динә – 30 йыл йәшерҙе. Һинән ҡурҡты.
Суфия – Ә ҡайҙа йәшереп тоттоң уны?
Динә – Ул мине тыуғас та роддомда ҡалдырып китте.  Мине сит кешеләр алып үҫтерҙеләр. Үҙҙәренеке етмәй ине. Етмәһә айнымай эстеләр. Бына шундай яҙмыш минең! Йәтимлек! Тере әсәйем һәм өләсәйем була тороп.
Суфия – Һин үҙ балаңдан баш тарттыңмы, Нурия?
Динә – Мин әсәйемде бер кемгә лә ғәйепләргә бирмәйем.
Суфия -  Был ысынлап та дөрөҫмө, Нурия?
Динә – Дөп – дөрөҫ! Өләсәйем! Мин һиңә ҡарап туя алмайым! Йырланмаған йырым минең!
Суфия –Мин ғәйепле быға, кисер мине Нурия, һиндә кисер!
Динә – Ярар инде өләсәй, төкөр донъяһына, онотайыҡ.
Суфия – Меҫкен балаҡай! Шул хәтле минән ҡурҡырға мин аждаһамы ни?! Кисерегеҙ мине ҡыҙҙарым.
Нурия – Тыныслан әсәй! Барыһы ла һин уйлағанса түгел. Хәҙер дөрөҫөн һөйләйем.
Динә – Кәрәкмәй! Кемгә кәрәк ул дөрөҫлөк, мин үҫтем бит инде. Кемдәндер ғәйеп эҙләү ниңә кәрәк? Йөҙ йыл асыҡлайбыҙ (эҙләйбеҙ) һаман бер урында тапанабыҙ.
Суфия – Йә бер ҡарайым әле үҙеңә! Исемең нисек һуң?
Динә – Динә.
Суфия – Күҙҙәре Нурияныҡы! Эйәге минекеме? Шулай бит Нурия ҡара әле, ә ҡаштары ҡаштары олатаһыныҡына оҡшаған, юҡ минекенә ахыры!
Динә – Әлбиттә уныҡы кемдеке булһын башҡа, әйтәләр бит оҡшашлыҡ быуындан – быуынға бирелә тип.
Суфия – Иремдеке! Күрмәне бахыр! Эйәге минеке, ә ҡаштары иремдеке. Әллә ҡаштары ла минекеме, юҡ инде ярар уныҡы булһын! Булат маңлайына ҡара һин уның.
Булат – Иҫ киткес маңлай!
Суфия – Ә танау кемдеке?
Булат – Танау тураһында әйтмәй ҡалмағыҙ, танау ул бик мөһим.
Динә - (Булатҡа ҡарап) Ә был кем? Миңә уның турала һөйләмәнегеҙ.
Булат – Ә ниңә? Мин был байрамда сит кеше.
Суфия – Булат Нурияның ирһеҙ тапҡан балаһы өсөн тәңкитләмәгеҙ инде.
Булат – Ә кем һуң мин бында, Нурияны ғәйепләргә.

Суфия – Нисек кем инде? Һеҙ бит кейәү.

Булат – Эйе, мин ул ҡарт кейәүгә сыҡмаған ҡыҙға өйләнергә әҙер инем шул. Ҡарт ҡыҙ – ҡыҙғаныс та, романтика ла, тик ул ҡарт ҡыҙҙың аҫтыртын тормош алып барыуы мине шаҡ ҡатырҙы. Унның менән сағыштырғанда оҙон ботло ҡуян да, бесәйҙәр ҙә күпкә итәғәтлерәк. Уларҙы шунда уҡ аңлап була.

Динә – Кем был?

Нурия – Был...былмы... былай ғына.

Булат – Миңә командировкаға китергә кәрәк ахры...тундраға. Барып еткәс тә шылтыратырмын тирмәнән.

Динә – Кем был?

Нурия – Был, был һинең атайың!

Динә – Атаҡайым! Ҡәҙерлем! Бына беҙ осраштыҡ та инде! Ах мин шундай шат! Һин миңә шул тиклем кәрәк! Атаҡайым!

Булат – Юҡ, юҡ минең менән был хәйлә килеп сыҡмаҫ! Мин һеҙҙе ҡыҙлыҡҡа алырға йыйынмайым.

Суфия – Һеҙ үҙ ҡыҙығыҙҙан баш тартаһығыҙмы? Минең һеҙгә күңелем ҡайта башланы.

Булат – Минең балаларым юҡ! Һәм бер ҡасан да булманы, улым да, ҡыҙым да.

Суфия – Минең Нуриям алдай белмәй. Һеҙ быны бик яҡшы беләһегеҙ

Булат – Эйе, мин быға бик иғтибар иттем. Һиңә нисә йәш?

Динә – кәрәкмәй ул турала атаҡайым

Булат – (ҡысҡырып) Нисә йәш?

Суфия – Ҡысҡырма балаға! Нисә йәш һиңә ҡыҙым? Атайыңа яуап бир!

Динә – Утыҙ, шунан?

Булат – Былай ғына. Мин бына утыҙ йыл элек Варкутала армияла хеҙмәт иттем. Ул бынан бик йыраҡта.

Суфия – Ә һин ҡыҙым утыҙ йыл элек...

Нурия – Елецта эшләнем! Юллама буйынса.

Суфия – Һеҙ Елецта булдығыҙмы?

Булат – Мин унда бер ҡасан да булманым.

Нурия – Ә мин Елецтан Варкутаға барҙым.

Суфия – һин Елецтан Варкутаға, ниңә?

Нурия – Экскурсияға (пауза)

Суфия – Булат!

Булат – Нимә?

Суфия – Танау бит нәҡ һинеке!

Булат – Һеҙ нимә ысынлап та минең ҡыҙым тип әйтмәксе булаһығыҙмы

Динә – Ни бысағыма шул тиклем борсолорға атаҡайым?! Һеҙгә бер ниндәйҙә зыян юҡ? Алимент түләргә кәрәкмәй. Мин инде үҫеп еттем. Йәшәр урыным бар. Һеҙгә файҙа ғына минән. Ҡартлыҡ тау артында түгел ул, хәҙер килеп етә. Ә баҡтиһәң һинең ҡыҙың бар. Һыуһағанда һыу бирерлек.

Суфия – Бөтөнләй баланың ҡотон алып бөттөгөҙ, кил ултыр үҙең тураһында һөйлә. Нисен беҙһеҙ йәшәнең һин?

Динә – Тормош мени инде ул! Көн-төн эскән өсөн атай менән әсәйҙе әсәлек хоҡуғынан мәхрүм иттеләр.

Нурия – Ни тиһәң дә үҫтергәндәр бит әле.

Динә – Үҫтергәндәр мени! Башта детдомда унан һуң общагта

Булат – Мин бер нимәгәлә ышанмайым

Суфия – Нурия, һин ҡыҙыңды нисек яфаланғаның белгәнһең, берҙә өндәшмәнең

Динә – Ҡайҙан белһен ул: беҙ бит роддомда айырылыштыҡ.

Булат – Ә нисек табыштығыҙ?

Динә – Осраҡлы рәүештә: кисә генә.

Булат – Иҫ киткес! Ә нисек бер-берегеҙҙе танынығыҙ! Ҡан тарта типме?

Динә – (сумканан бала кейемдәр сығара башлай) Бына! Бына!

Булат – Был ниндәй сүп-сар?

Динә – Был минең биркәм! (илап) Әсәйем ҡалдырып киткән йүргәктәрем.

Булат – Ышанмайым, мин был Бразилия сериалдарына, ышанмайым.

Динә – Бына махсус һеҙҙең өсөн, ситтәрендә әсәйемдең билгеләре бар. Ошонан һуң да ышанмайһығыҙмы? Шулай бит өләсәй!

Суфия – Күрһәт әле миңә! Ысынлап та Нурияның ҡулы

Булат – Суфия ханым һеҙ бит аҡыллы ҡатын/

Суфия – Был ысынлап та Нурияның ҡулы.

Булат – Һеҙ нимә баланы ҡалдырыр алдынан пеленкаһына тамға ҡуйҙығыҙмы?

Нурия – Әлбиттә!

Булат – Былай булғас һеҙ бит кәкүк... ә шулай ҙа мин бер кемгә лә ышанмайым.

Динә – Мин белмәйем инде нисек ышанмаҫҡа була һәм әсәйемә тауышыңды күтәрмә! Мин әсәйемде күптән күрҙем! Ул беҙгә йәшелсә – емеш базаһына килә торғайны, бер ваҡыт минең һатыу иткән аҡсам етмәне. Мин кабинетта илап ултыра инем, ишек асыҡ торған. Миңә тиҙ генә аҡса кәрәк ине. Бер кемдән табып булмай, ә әсәй прилавка янында ҡарап, ишетеп торған. Мин илай, илай сыҡҡанды күреп, әсәйем «һеҙгә күпме кәрәк, Хоҙай өсөн иламағыҙ» тине...

Булат – Шунан бирҙеме? Ышанмайым...

Динә – Миңә ышанмаҫҡа ни хаҡығыҙ бар. Бирҙе ул миңә аҡса ант итеп әйтә алам.

Суфия – Меҫкен балаҡай! Күпме ғазап сиккән. Берүҙе(яңғыҙы)

Динә – Яңғыҙым, ә хәҙер мин һеҙҙе таптым әсәкәйем һәм һине өләсәй.

Суфия – Шулай сибәрһең! Нишәп кейәүгә сыҡманың?

Динә – У-у-у мин кейәүҙә, беләһегеҙме нисә тапҡыр булдым!? Законлыһы гына биш тапҡыр. ЗАГС штампы менән бөтә паспортымды бысратып бөттөләр

Суфия – Балаларың да бармы?

Динә – Нимә юҡ шул юҡ инде.

Суфия – Беҙгә тиҙ рәүештә ҡушылырға кәрәк, бергә йәшәргә. Күпме ваҡыт әрәм иткәнбеҙ.

Динә – Мин бик теләп ҡушылыр инем дә, тик булдырып булмаç шул. Һеҙ ана ниндәй хан һарайында йәшәйһегеҙ, ә мин эт ояһында коммуналкала.

Суфия – Беҙҙең бер бүлмәле фатир, һиндә – бүлмә. Беҙ бит бына тигән ике бүлмәлене алабыҙ. Етәр һиңә сит кешеләр менән йәшәргә. Бергә булайыҡ! Нурия бир әле миңә ҡумтаны (Нурия шкатулка алып бирә) ҡара балаҡайым.

Динә – Ооо был бит музейҙан да кәм түгел!

Булат – Бына һиңә мә! Ҡайҙан килгән ул һеҙгә?

Суфия – Бына ҡарағыҙ! Ынйылар бер нисә төрлө. Бриллиант муйынсаҡ. Ә быныһы малохит. Быныһы гранат муйынсаҡ, беләҙек, сапфир йөҙөк. Барыһы ла ҡыҙыл алтындан

Динә – Хазина! Һеҙ нимә музей таланығыҙмы әллә?!

Суфия – Ата-бабаларҙан ҡалған аçыл таштар. Ҡатын-ҡыҙҙар яғынан мираç булып килә.

Динә – Былар барыһы ла әсәйегеҙҙән ҡалдымы?

Суфия – Минең әсәйем, һинең оло өләсәйең революционер булған.

Динә – Партия аҡсаһына алып һалған инде! Афарин, оло өләсәй! Йоҡлап ятмаған

Суфия – Һин нимә?! Партияның ҡайҙан булһын ул тиклем байлығы.

Динә – Улай булғас, ҡайҙан килгән һуң ул?

Суфия – Минең өләсәйем бик аçыл таштар яратҡан, шуға күрә ғүмере буйы йыйған

Динә – Хәҙер был аçыл таштар, һеҙҙеке.

Суфия – Юҡ, һинеке: мә ал һәм һаҡла һин уларҙы! Балаҡайым, һин әсәйең өсөн дә, минең өсөн дә бик ҙур шатлыҡ! Аллаға шөкөр! Аçыл таштарҙы алып ҡалырға кеше табылды. Һинең арҡала балаҡайым мин бәхетле булып үләм.

Динә – Юҡты һөйләмә өләсәй, ташла! Йәшә һин!

Нурия – Әсәй бир ҡумтаны! Мин уны урынына алып ҡуяйым. Динә ул аçыл таш та хәҙер уныҡы икәнен белә бит инде. Беҙгә килгән һайын алып ҡарар.

Суфия – Ниэшләп инде! Алһын үҙе менән! Барыһы ла уныҡы булһын. Бәлки берәйһен тағып та ҡарар. Ал, Динә, ал! Һин – минең иң ҙур хазинам!

Динә – Өләсәй һин нимә быларҙың барыһын да миңә бүләк итергә булдыңмы?

Суфия (көлөп) – Бүләк иттем бит инде.

Динә – Был бит байҙар байлығы. Был бит ҡот осҡос хаҡ. Был бит бер нисә машина.

Суфия – Беҙ бит беренсе осраған кешегә бүләк итмәйбеҙ, ә үҙебеҙҙең ҡыҙыбыҙға!

Динә – У-у өләсәйем – алтыным! Рәхмәт! Әсәкәйем мине эҙләп тапҡаның өсөн рәхмәт! Һиңә лә ҙур рәхмәт атай!
Булат – Мине ҡыҫтырмағыҙ. Минең бер генә лә ҡатнашым юҡ.
Динә – Был аҫыл таштарға ҡарап мин барығыҙҙы ла иҫкә төшөрөрмен.
Суфия – Ниэшләп иҫкә төшөрөп ултырырға? Иҫән булғанда мин һинең менән булырға тейешмен. Һиҙенәм йәшәргә был донъя ҡалһа бер ике ай ҡалғандыр.
Динә – Ярай мин китәйем. Минең эштәрем күп...иртән иртүк тораһы бар...
Суфия – Беҙҙә ҡунмайһың мени?
Динә – Икенсе ваҡыт... бөгөн былай ҙа баш буталды, өнмө, төшмө...
Нурия – Был аҫыл таштар һинеке, әлбиттә, һин уларҙы беҙҙә ҡалдырып тор. Төнөн ҡурҡыныс бит урам буйлап ундай байлыҡ менән йөрөү.
Динә – Ниндәй ахмаҡ талаһын мине! Кемгә кәрәк мин. Ҡарағыҙ минең киәфәтемә. Өләсәй, әсәй, атай. Барығыҙға ла ҙур рәхмәт. Һау булығыҙ! Был мәңге онотторлоҡ түгел...
Нурия – Подъезда ипләп банан һабаҡтары.
Динә – Ҡурҡмайым мин уларҙан. Үҙем банандар һатам (коридорға Булат та сыға).
Булат – Хәҙер һеҙ миңә аңлата алаһығыҙмы бында нимә булғанын?
Нурия – (бәлтәһен бирә Булатҡа) Кем һуң һеҙ? Ниэшләп мин һеҙгә аңлатып һәм аҡланып торорға тейешмен. Тыныс йоҡо.
Булат – Һеҙ мине ошондай хәлдәрҙән һуң ҡыуып сығараһығыҙмы?
Нурия – Ә нимә булды? Бәләкәй генә күңелле спектакль.
Булат – Әгәр ҙә утыҙ йыл элек мин ҡыҙым барлығын белһәм, мин уны барып алған булыр инем.
Нурия – Әсәһенә алып барып бирер инегеҙме?
Булат – Динә минең ғаиләлә үҫкән булыр ине, уны барыһы ла яратыр ине, әсәйем дә оҙаҡ йәшәгән булыр ине (телефон шылтырай).
Нурия – Һеҙҙе һорайҙар!
Булат – Мин юҡ!
Нурия – Үҙегеҙ әйтегеҙ!
Булат – (трубкаға) Эйе. Ә ниэшләп һин минең менән улай һөйләшәһең. Әйткәндәй, минең ҡыҙым һинән ун йәшкә олораҡ. Һәм шылтыратма башҡа бында. Бында минең ҡыҙым һәм ҡәйнәм. Юҡ, ул миңә ҡатын түгел. Эйе ҡыҙым бар, ҡәйнәм бар, бисәм юҡ. Ул миңә ҡатын түгел. Нимәһен алданым? Мин бында яңылыш килеп эләктем кисә кис, ә бөгөн яңылыш түгел. Башҡа шылтыратма бында (трубканы һала) үткәнде үҙгәртеп булмай. Ләкин бөгөнгөнө үткән ғүмер менән тигеҙләргә була.
Нурия – Һәм йомғаҡ яһарға?!
Булат – Беҙҙең хаталарыбыҙ һәм еңел уйлау арҡаһында, ҡыҙыбыҙҙың тормошо емерелгән. Алда яһаған хаталарым өсөн мин үҙ үҙемде ҡорбан итергә әҙермен.

Нурия – Нисек ҡорбан итергә... Ҡурҡытмағыҙ әле мине!
Булат – Мин уйлайым! Әгәр мин өйләнһәм ҡот осҡос бер нәмәлә булмаҫ.
Нурия – Һеҙ ышандығыҙ!?
Булат – Мин һеҙҙе әкрен генә иҫкә төшөрә башланым! Ни тиһәң дә утыҙ йыл үткән
Нурия – Беҙ һеҙҙең менән ни бары кисә генә таныштыҡ. Мин бер ҡасанда Воркутала булғаным булманы. Бала ла тапманым. Динә – ул ябай һатыусы йәшелсә – емеш һата. Мин уның телефон номерында белмәйем. Фамилияһын да белмәйем
Булат – Һеҙ мине ахмаҡ тип беләһегеҙме. Фамилияһын белмәй имеш. Ә нәҫел байлығы? Уны бит биреп сығарҙығыҙ. Әллә улары ла ысын түгелме?
Нурия – Улары ысын һәм тормошта ысын! Тик ҡыҙ ғына ысын түгел. Әсәйем үлеп бара. Ул был донъянан бәхетле китһен өсөн мин барыһын да эшләйәсәкмен.
Булат – (ҡысҡыра) Динә, минең ҡыҙыммы, әллә түгелме?
Нурия – Ҡысҡырмағыҙ миңә.
Булат –Ҡыҙыммы, түгелме?
Нурия – Юҡ, әлбиттә.
Булат – Улайһа миңә кем һуң ул?!
Нурия – Бер кемдә түгел. Әсәйемдә һеҙгә бер кем дә түгел, мин дә.
Булат – Һеҙ ҡот осҡос! Һеҙҙеңсә мин сығып киттем. Ошо ике көнлөк ваҡиғаны еңел генә онотоорға тейешме? Һеҙ аңлайһығыҙмы мин ошо ике көн эсендә нимәләр кисергәнемде?
Нурия – Ғәфү итегеҙ, мин һеҙҙе бында йәшәтә алмайым инде (Булат Нурияның сикәһенә һуға) (телефон шылтырай) тыңлайым! (тыңлай) Ә хәҙер һеҙ тыңлағыҙ! Миңә 50 йәш, 50-нән дә артыраҡ. Етмәһә, мин кейәүгә сыҡмаған ҡарт ҡыҙ. Мәғәнәһеҙ шаярта торған холҡом менән. Булат башҡаса бында килмәйәсәк. Бында бер ниндәй ҙә ҡәйнә лә, ҡыҙ ҙа юҡ! Башҡаса бында нәҫел байлығы ла юҡ! Мин уның ҡатыны түгел! Юҡ, ҡатыны түгел! Ҡатыны түгел, эйе өйләнергә тәҡдим яһаны. Юҡ тинем. Риза булманым, риза булманым! Сөнки яратмайым! Һеҙҙә уны яратмайһығыҙ? Ҡыҙғаныс, тимәк уны бер кемдә яратмай! Булдымы беҙ һеҙҙең менән ысын күңелдән әңгәмәләшеп алдыҡ. Шылтыратығыҙ, зинһар шылтыратығыҙ. Миңә бик һирәк шылтыраталар. (трубканы һала) Сикәгә һуҡты! Эй Аллам ниндәй бәхетһеҙ мин!
Суфия – Нурия ҡайҙа юғалдың. Ҡыҙым мин шул тиклем бәхетле!

## ИКЕНСЕ БҮЛЕК

*Бер аҙна ваҡыт үткән. Ике персонаға өҫтәл әҙерләнгән. Өҫтәлдә розалар. Радиола Яңы йыл тураһында тапшырыу. Суфия өҫтәл янында ултыра, Нурия шыршы биҙәй.*
Суфия – Булат шылтыраттымы бөгөн?
Нурия – Юҡ әле.
Суфия – Ә кисә?

Нурия – Әсәй, һин минән нисә тапҡыр һорайһың, ә мин нисә тапҡыр яуап бирәм. Булат көн дә шылтыратып тора.
Суфия – Нимә тип?
Нурия – Яратам ти.
Суфия – Кемде?
Нурия – Беҙҙе.
Суфия – Дөрөҫөрәге, асыҡлабыраҡ.
Нурия – Хафалана, борсола.
Суфия – Ни өсөн?
Нурия – Минең кәйефем һәм һинең һаулығың өсөн.
Суфия – Һеҙ уның менән гел минең турала ғына һөйләшәһегеҙме әллә?
Нурия – Юҡ, инде.
Суфия – Ул һине яратамы?
Нурия – Әлбиттә.
Суфия – Ә һин уны?
Нурия – Билдәле инде.
Суфия – Оҡшамай миңә был.
Нурия – Минеңсә барыһы ла яҡшы.
Суфия – Ә Динә ҡайҙа юғалды?
Нурия – Ауырып тора, һалҡын тейгән.
Суфия – Ауырып тора, ә һин быға тыныс ҡына ҡарайһыңмы. Үҙең үҫтермәгәнгәлер инде. Башта бар ауырыу ҙа үтер кеүек, ә төпкә китһә әллә нимәләр булыуы ихтимал. Баланы дауаларға кәрәк.
Нурия – Динә күптән бала түгел.
Суфия – Минең өсөн ул һәр саҡ бала.
Нурия – Ҡурҡырлыҡ бер нимә лә юҡ, һалҡын тейгән.
Суфия – Улайһа нимә булды һинең менән? Бәлки аңлатырһың?
Нурия – Барыһы ла бына тигән! Һиңә шыршы оҡшаймы?
Суфия – Миңә бер нимәлә оҡшамай! Һин нимә мин бер нимә лә аңламай тип уйлайһыңмы. Мин барыһын да беләм, ни өсөн кәйефең төшкәнен дә. Йәшермә минән Нурияҡайым!
Нурия – Тимәк һин барыһын да беләһең?
Суфия – Һуҡыр ҙа күрә, Динә беҙҙең менән Яңы йылды ҡаршы алмай. Эгоист булмайыҡ. Минең хаталарымды ҡабатлама Нурия. Динә йәш, уның үҙенең компанияһы бар. Күңел асһын рәхәтләнеп. Барыһы ла һәйбәт буласаҡ. Һинең бынамын тигән ҡыҙың бар. (килә)
Нурия – Яратам мин һине, әсәй!

Суфия – Улайһа кит минең янымдан! Хәҙер үк кит! Ултырма минең эргәмдә! Ишетәһеңме!
Нурия – Китергә?! Ҡайҙа? Ниңә?
Суфия – Булат янына! Яңы йылды һеҙ уның менән бергә ҡаршы алырға тейеш
Нурия – Мин теләмәйем! Барғым килмәй!
Суфия – Алдама мине! Алдама! Мине яңғыҙ ҡалдырырға ҡурҡаһың, ә мин талап итәм! Хаҡым бар талап итергә!
Нурия – Был мөмкин түгел, әсәй!
Суфия – Ҡыҙым үтенеп һорайым һинән! Бар, Булат янына! Мин үҙем дә бик яҡшы ултырам. Мин һине Яңы йылды Булат менән ҡаршы алыуыңды теләйем! Аңлайһыңмы?
Нурия – Әсәй мин һинең берүҙеңде бер ҡасан да ҡалдырмаясаҡмын
Суфия – Һин нимә мине байрамһыҙ ҡалдырырға теләйһеңме?! Мин байрам төнөндә һинең моңһоу йөҙөңә ҡарап ултырайыммы? Һин бында минең менән, ә Булат тегендә башҡа ҡатын тапһа? Мин беләм, Яңы йылда ниндәй генә мажаралар булмай. Бар ҡыҙым, мине бәхетле итер өсөн бары тик һинең китеүең кәрәк
Нурия – Тышта ҡараңғы бит! Нисек барып етермен?
Суфия – Етәр итәгемә йәбешеп йөрөргә. Такси саҡырт.
Нурия – Яңы йыл төнөндә ниндәй такси? Уны алдан саҡыртырға кәрәк ине.
Суфия – Сәғәт 9 ғына әле! Автобустар йөрөп тора, өлгөрәһең.
Нурия – Урамда һалҡын, еүеш, ел.
Суфия – Урамға сығыу менән һинең кәйефең күтәреләсәк. Бөтә кеше урамда хәҙер, шау гөр килеп Яңы йыл ҡаршы алырға әҙерләнәләр.
Нурия – Өшөтә, ауырырға итәм ахыры.
Суфия – Йылыраҡ кейен.
Нурия – Минең бер ҡайҙа ла барғым килмәй, әсәй!
Суфия – Минең хаҡыма, ҡыҙым.
Нурия – Бер үҙең нишәйһең инде һин бында?
Суфия – Табырмын.
Нурия – Ярай, мин риза.
Суфия – Ашыҡ ҡыҙым, ашыҡ, бер үк һуҙлап ҡуйма инде. (Нурия коридорға сыға, бәлтәһен кейә, унан кире инә)
Нурия – Мин әҙер.
Суфия – Ә бүләк! Булатҡа бүләк! Был бит яңы йыл!
Нурия – Юлда берәй нимә алырмын әле!
Суфия – Нисек берәй нимә? Ул бит Булат, Булатҡа берәй нимә имеш?
Нурия – Борсолма, әсәй, уйлап табырмын!

Суфия – Мин уйлап таптым инде. Булат һуңғы тапҡыр беҙҙә булғанда күҙендә алмай Мостайҙың китаптарына ҡарай ине. Күрәһе ул да Мостайҙы уҡырға ярата. Беләһеңме, беҙ уға Мостайҙың 5 томлығын бүләк итәйек.
Нурия – Әсәй, ә беҙ Мостайһыҙ ниэшләйбеҙ?
Суфия – Мостай бер ҡайҙа ла китмәҫ! Барыһы ла уйланылған уның менән өйләнешкәс тә, Мостай ошо кәштәләргә кире ҡайта.
Нурия – Мин хәҙер шул 5 томды күтәреп барайыммы инде?
Суфия – Улар ул тиклем ауыр түгел. Егерме том түгел бит. Ялҡауланма, Нурия иҫ киткес буласаҡ. (сумкаға тултыра ла китаптарҙы) кил әле ҡыҙым! Бер үбәйем үҙеңде. Ниңә көмһөрөң ҡойолдо, Яңы йыл төнөндә һинең минән китеүеңә мин бәхетле!
Нурия – Һиңә лә әсәй иҫәнлек, оҙон ғүмер теләйем.
Суфия – Оҙаҡ йәшәй алмам шул ҡыҙым. Йәшәһәм дә тағы бер генә йыл ҡалғандыр.
Нурия – Әсәй мин һинең менән ҡалам!
Суфия – Юҡ, һин бында ҡалмайһың, Булатҡа минән сәләм әйт (Нурия фатирҙан сығып китә, подъезда һикәләргә ултыра, күңелле музыкалар башҡа фатирҙан ишетелә, сумкаһын ҡуя, фатирында телефон шылтыратҡанын ишетә итә ләкин кире йүгерергә баҙнат итмәй)
(телефон тауышын ишетеп) Булат шылтырата... йә Динә ҡыҙым... ә Нурия өйҙә юҡ... (бик ауырлыҡ менән телефонға бара башлай) хәҙер Булат...хәҙер Динә балаҡайым...(телефон янына барып еткәс шылтыратыу туҡтай) тағы бер ҡат, йә тағы бер генә тапҡыр! Килеп еттем бит инде! Килеп еттем, бер нәмәгә лә ярамайым икән мин. Хәҙер! Хәҙер! Хәҙер! (телефон янындағы ултырғысҡа ултыра)
(тышта. Нурия телефон тауышы тынғанын ишеткәс, кире ултыра һәм Мостайҙың китабын ала, уҡый) (подъезға елкәһенә тоғон аҫып ҡыш бабай килеп инә, ул таяҡ таянған)
Нурия – Яҡын килмәгеҙ миңә. Хәҙер ҡысҡырам.
Ҡыш бабай (Динә) – (Динә тауышы менән) Яңы йыл менән! (Нурия өҫтөнә кәнфиттәр һибә) Яңы бәхеттәр менән! Нимә өйҙән ҡыуып сығарҙылармы әллә? Был мин Динә...үҙеңдең ҡыҙың! Иҫегеҙгә төштөмө? Ниэшләптер мин һеҙҙе һағындым һәм бына килдем. Ҡыуып сығармаҫһығыҙ әле тип уйлаһам, һеҙҙе үҙегеҙҙе ҡыуып сығарғандар түгелме? Әйберҙәрегеҙ менән!
Нурия – Динә һин?
Динә – Ә һеҙ ысын ҡыш бабай тип уйланығыҙмы?
Нурия – Динә! Мин бик шатмын! Ҡыҙыҡ уйлап тапҡанһығыҙ ҡултыҡ таяғы менән, шәп! Яңы йыл менән! Яңы бәхеттәр менән! Ысын ҡыш бабай! Ярты быуат элек һуңғы тапҡыр ысын ҡыш бабайҙы күргәйнем (Динәне әйләндерә башлай)
Динә – Иплəп, иплəп. Ҡултыҡ таяҡтары ла ысын. Әкрен уй кәрәкмәй миңә әйләндерергә уй

Нурия – Нимә булды һиңә, Динә?
Динә – Хоҙай яҙаланы.
Нурия – Нисек?
Динә – Теге байлыҡ ҡулыма килеп эләккәс, кире алып ҡуймаһындар тип подъездан югереп төшөп бара инем. Теге малай ташлаған банан ҡабығына тайып йығылдым. Аяҡты һындырҙым. Малай ғәйепле түгел бында. Мин ғәйепле. Шул тиклем байлыҡ күргәс, күҙҙәрем томаланды, элек урлашыусыларҙың ҡулдарын киҫһәләр, күрәһең хәҙер аяғын һындыра Хоҙай. Мин уларҙы кире килтерҙем. Нурия апай, ғәфү итегеҙ мине. Ысынлап та ата-әсәйемә мин бөтөнләй кәрәкмәйем. Ә бында тотторҙолар ҙа ҡуйҙылар. Һәр кемдең ысҡыныуы ихтимал, ундай байлыҡтан. Нурия апай һеҙ миңә ул муйынсаҡтарҙы бер генә көнгә биреп торорһоғоҙ әле. Буянып – яһанып шуларҙы тағып кибетемә  барып торайым тим. Әйҙә бар һатыусылар көнләшеүенән шартлаһындар.
Нурия – Һинең килеүең беҙҙең өсөн ҙур шатлыҡ. Әйҙә фатирға инәйек. Өләсәйеңде шатландырайыҡ! Нимә һөйләйем мин, мин бит үҙем хәҙер иллелә, әллә аҡылдан яҙҙым
Динә – Ниндәй иллелә мин, һеҙгә 47 генә бирер инем.
Нурия – Ниндәй һәйбәт кеше һеҙ, Динә.
Динә – Мин түгел, һеҙ һәйбәт. Миңә һеҙҙең менән тормош тураһында бик күп кәңәшләшәһе бар әле.
Нурия – Һөйләшербеҙ. Төн беҙҙеке. Шунан нимә эшләйбеҙ? Бергәләп кереп барыһын да аңлатайыҡ. Минең башым әйләнә...
Динә – Аңлатырға? Һеҙ нимә? Әсәйегеҙҙе байрам көнөндә гүргә оҙатырға теләйһегеҙме? Әсәйегеҙ бала кеүек бит һеҙҙең. Был донъяла дөрөҫлөктән башҡа ла бөйөк нәмәләр бар бит! Алдар өсөн биргән аҡсаларығыҙҙы кире ҡайтара алмайым, сөнки тотондом мин уларҙы.
Нурия – Аҡса тураһында борсолмағыҙ, аҡса мөһим түгел.
Динә – Изге кешеләр һеҙ! Аҡса мөһим түгел! Ғаилә байлығы мә һиңә Динә, тик ал ғына. Ҡыҙыҡ.
Нурия – Ул бит һеҙҙе минең ҡыҙым тип уйлай.
Динә – ә минең әсәйем менән атайым була тороп нимә күрҙем мин? Баштан да һыйпаманылар, Нурия апай. Өләсәйемдән мәхрүм итмәгеҙ мине (илай) үтенеп һорайым. Ул бит минең берҙән берем
Нурия – Улайһа, әйҙә «һин» тип һөйләшәйек, аңланыңмы?
Динә – Әлбиттә! Алға! Атакаға! (коридорҙа ултырған Суфияны күрмәйенсә икенсе бүлмәгә югереп керәләр)
Нурия – Әсәй, ҡара әле мин һиңә ниндәй шатлыҡ (бүләк) алып килдем! Әсәй! Ҡайҙа һин?
Динә – Сыҡҡандыр! Берәй йомош менән.
Нурия – Әсәйем ун йыл инде атламай.

Динә – Урлағандар! Хәҙер заманаһы шундай бит – урлағандар!
Нурия – Булмаҫ! Мин ишек янынан китмәнем
Динә – Хоҙай тере килеш күккә алып менеп киткән! Миңә аҫыл таштарын бүләк иткән өсөн. Мин хәҙер бер нәмәгә лә аптырамайым.
Нурия – Әсәй!
Суфия – Нурия! Ҡайҙа һин? Һин кем менән?
Нурия (әсәйен ҡосаҡлай) – Әсәй! Һин унда нисек барып еттең?
Суфия – Кем был?
Динә – Мин ҡыш бабай, мин аҡ бабай, йыраҡтан килдем бүләктәр алып килдем!
Нурия – Әсәй, ҡурҡма! Был беҙҙең Динәбеҙ! Ул беҙҙе шаяртырға уйлаған!
Суфия – Балаҡайым минең.
Динә – Мин ҡыш бабай, мин һыуыҡ бабай.
Суфия – Афарин! Нисек уйлап тапҡан бит ә! Ҡыш бабай ҡултыҡ таяҡтары менән ғүмеремдә быңдайҙы күргәнем булманы. Был нимәнелер аңлата буғай
Динә – Был аяҡтың һынғанын аңлата.
Суфия – әйттем бит мин һиңә Нурия! Ә һин һыуыҡ тейгән уға имеш, күрәһеңме ниндәй булған.
Нурия – Әсәй, һиңә бүлмәгә инергә кәрәк.
Суфия – Ярар үҙемдә инәм мин.
Нурия – Таян миңә.
Суфия – Таянмайынса ла инәм мин! Тик һин Нурия йыраҡ китмә, ә һин Динә йырағыраҡ тор, йә йығырмын үҙеңде (Динә бүлмәгә кер алып килгән, алҡаһын ҡуя, аҫтына ялтыр һауыттарға бүләктәрен урынлаштыра, ошо ваҡытта Суфия әкрен генә стенаға таянып бүлмәгә табан атлай)
Нурия – Ипләп әсәй, йығылып ҡуйма!
Суфия –Ошондай бәхетле тыныс тормош башланып торғанда ниндәй йығылыу инде ҡыҙым.
Нурия – Нығыраҡ тотон миңә әсәй.
Суфия – Кәрәкмәй. Өйрәнергә кәрәк. Хәҙер миңә гел тыныс ҡына ултырып булмаҫ, ғаилә ҙурайҙы. Эш күп буласаҡ!
Динә (ҡаршы ала бүлмәлә) – минең килеүемде белгәндәр, минән бүләк көткәнәр
Нурия – Ултыр, әсәй, ултыр!
Суфия – Бер аҙ ултырғас тағы тороп йөрөрмен, ни тиһәң дә, Яңы йыл бит.
Динә – Һиңә өләсәй фотоаппарат.
Суфия – Фотоаппарат, миңә?
Динә – Бер-беребеҙҙе хәҙер фотоға төшөрәсәкбеҙ, ғаилә фото альбомын эшләйбеҙ.
Суфия – Мин йәш саҡта фотоға төшөрә инем ул. Тик онотоп бөткәнемдер инде.

Динә – Өйрәтермен! Барыһы ла иҫеңә төшөрөрмен. Төн беҙҙеке! Ә был һиңә әсәй! (Нурияға ялтырап торған декольте күлдәк бирә) зинһар кеә! Теге муйынсаҡтарҙы таҡ күберәк итеп. Һин биргән аҡсаның барыһын да ошо күлдәккә тыҡтым (һалдым, бирҙем)

Нурия – Рәхмәт, Динә! Мин бындай күлдәк кейергә ҡартайҙым инде.

Суфия – Ҡарт икәнһең Динәгә бир, кейһен рәхәтләнеп.

Динә – Кей, әсәй! Быны кейгәс, һин шунда уҡ йәшәреп китерһең.

Суфия – Бәхәсләшмә, кей Нурия! Беҙҙән башҡа барыбер береһе лә күрмәйәсәк!

Нурия – Ярай, кейәм (сығып китә күлдәген алып).

Динә – Ә беҙ икенсе шыршыны биҙәйек, байрам булғас, байрам булһын (шыршы биҙәй башлай)

Суфия – (фотоаппаратты ҡарап) Йәш саҡта гел олатайыңды фотоға төшөрә инем.

Динә – Ниндәй олатай?

Суфия – Һинең олатайыңды? Беҙҙә күп уның фотолары. Ҡыҙғаныс, күрә алманы һине. (Динәне фотоға төшөрә, вспышка ялтырауынан ҡурҡып китә) А-а-а....

Динә – Ҡурҡма өләсәй! Был вспышка, ниэшләп инде мине һаҡал менән төшөрәһең? (Нурия керә яңы күлдәк кейгән, аяғында оҙон үксәле туфли, муйынында муйынсаҡ)

Динә – ҡара өләсәй ниндәй матурлыҡ! Аҡҡош! Ханбикә!

Суфия – Ә Булат киләме?

Нурия – Шылтыратырға тейеш.

Динә – Ошо күлдәктә мин һатыу иткән кибетҡа инеп сығырһың әле әсәй. «Был минең әсәйем, миңә кискә тәмле аш бешереп ҡуйыр өсөн кишер алырға инде» тип эре генә ҡыҙҙар менән таныштырырмын һине. Әйҙә көнсөлләктәренән шартлаһындар.

Нурия – Инермен, әлбиттә, инермен.

Суфия – (фотоға төшөрөргә итә) Нурия саҡ ҡына һулғараҡ шыл. Бына шулай ике шыршы араһында тор! Туғандарға ебәрербеҙ! Динә тор әсәйең эргәһенә. Нурияны бер үҙен төшөрөүе ҡыҙыҡ түгел

Динә – Һаҡалды һалмайым да! (Нурия эргәһенә баҫа).

Суфия – Йылмай Нурия! Үлек кеүек торма әле. күҙҙәрең әллә ниндәй... булды! Әҙер! Нурия тиҙ генә бар һин кит. Оҙаҡламай Яңы йыл етә.

Динә – Өләсәй, ә ниэшләп әсәйемде ҡыуаһың? Ҡайҙа?

Суфия – Атайың эргәһенә. Ә беҙ һинең менән икәүләп бында күңел асырбыҙ.

Нурия – Әсәй, мин хәҙер бер ҡайҙа ла өлгөрмәйем бит. Яңы йыл етеп килә.

Суфия – Шулай булғас ваҡытты һуҙма! Югер! Бар!

Динә – Ирҙәр артынан югереү һуңғы эш ул. Һин югерәһең уның артынан, ә ул ҡаса. Киреһенсә уларҙан ҡасырға кәрәк, ана шул ваҡытта улар һинең артыңдан саба башлайҙар. Быға улар ғәйепле түгел тәбиғәт рефлексы.

Суфия – Ололар һөйләшкәндә ҡыҫылма. Нурия бар югер, ашыҡ! Беҙҙең өсөн борсолма

Нурия – Ярай, әсәй!

Суфия – Мостайҙы онотма (Нурия сумкаһын алып коридорға сыға, телефон шылтырай).

Нурия – (йүгереп барып трубканы ала) Алло! Мин! (күңеле төшөп) һаумыһығыҙ! Ҡуянҡай! Рәхмәт! Һеҙҙе лә Яңы йыл менән. Сәләм әйтергә! Ә Булат һеҙҙә түгел мени? Юҡ сәләм әйтә алмайым сөнки ул миндә түгел! Юҡ ул килмәй! Әлбиттә бында башҡаса килмәйәсәк. Мин һеҙгә вәғәҙә бирәм. Әгәр һеҙгә барһа минән сәләм әйтегеҙ! Яңы йыл менән ҡотлағыҙ! Һау булығыҙ!

Суфия – Нурия, киттеңме һин?

Нурия – Юҡ әле, әсәй! Әллә кире уйланыңмы?

Суфия – Юҡ, әлбиттә! Һуңларһың тип борсолам. Тиҙерәк ҡылан.

Динә – Өләсәй һин хаталанаһың!

Суфия – Ололар һөйләшкәндә бүлдермә.

Динә – Мин әсәйемде рәнйетергә бирмәйем.

Нурия – Талашмағыҙ! Рәхәтләнеп күңел асығыҙ! Яңы йыл менән һеҙҙе! Оҙон ғүмер теләйем һиңә әсәй.

Суфия – Оҙаҡ йәшәргә ҡалмаған инде...ҡалһа ике йыл ҡалғандыр.

Нурия – Килеүең өсөн рәхмәт һиңә Динә (уны үбә) бәхет теләйем!

Динә – (Нурияны оҙата сыға) Йыраҡ китмә тор шунда ғына.

Суфия – (артынан ҡысҡыра) Мостайҙы онотма, Мостайҙы.

(Нурия подъезға сығып сумкаһына ултыра Динә инеп китә).

Динә – Өләсәй иҫке йылды оҙатырға ваҡыт етте.

Суфия – Рәхәтләнеп эсәм мин бөгөн һал миңә лә...морсҡа бер егерме тамсы (Динә эсергә әҙерләй).

Суфия – Үҙеңә артыҡ күп һалдың түгелме?

Динә – Ҡайғырма өләсәй, эсергә етәрлек. Мин үҙем менән дә килтерҙем.

Суфия – Шулай күп эсәһеңме? (аптырап)

Динә – Юҡ! Бөгөн эсергә кәрәк! Иҫке йыл өсөн! Суҡынып китһен! УРА! (эсәләр) Виноны алып ҡуям! Ҡаршыбыҙҙа ымһындырып тормаһын! (Виноны алып сығып китә, тышҡа сыға) Нисек һиңә бында әсәй?

Нурия – Рәхмәт. Бик ҡыйын түгел, яңғыҙмын, әммә күңелем менән мин һеҙҙең менән бергә.

Динә – Иҫке йылды оҙатабыҙ (виноһын) мә, әсәй тот.

Нурия – Беҙ хәҙер нимә алкаштар кеүек подъезда эсәбеҙ мени?

Динә – Бөтөнләй эсмәгәнгә ҡарағана, подъезда әҙерәк эсеү күпкә һәйбәтерәк (яҡшыраҡ)

Нурия – Ҡабырға ла юҡ.

Динә – Ҡабырға һуңғараҡ алып сығам. Иҫке йыл өсөн суҡынып китһен (ҡәһәр һуҡһын) тамсылап эсмә тиҙ иҫерәһең! Безгә бит төн буйы эсергә кәрәк, йотта ҡуй. Беҙгә һөйләшеп алырға кәрәк ине эсәй, әйҙә тағы берәрҙе, әле тағы ҡасан сыға алам.

Нурия – Етер, күп була бит.

Динә – Һиңә эсергә кәрәк. Һалҡын тейҙерәһең. Күҙеңде йом да ҡапла инде (Нурия күҙен йома һәм ҡурҡа-ҡурҡа эсә)

Динә – Мин үҙем ауырлы, ирем юҡ, яҡын арала булмаҫ та инде. Һин күҙеңде асма эс-эс (икенсе Ҡыш бабай килеп керә, елкәһендә тотҡан тоғо бар)

Нурия (эсеп бөтә, күҙен аса) Ул тиклем күп тә эсмәнем, ә янымда ике Ҡыш бабай.

Динә – Коллегалар килеп еткән! Тағы берҙе ҡотлайыҡ. Мин үҙебеҙгә рюмкаға һалам, ә һин шешәнән ебәр (Ҡыш бабайға әйтә)

Нурия – Килеп еттек! Ике ҡыш бабай менән подъезда вино эсәм. Һин уны беләһеңме?

Динә – Бынымы, әлбиттә.

Динә –Ҡыш бабай.

Нурия – Аңлашылды! Иҫке йыл өсөн! (сәкәштерәләр һәм эсәләр)

Динә – (Ҡыш бабайға) Ширшындың бер-ике энәһен бир әле. әсәй мә еҫкә, йә иҫереп ҡуйырһың!

Суфия – (тороп ишек яғына бара ҡысҡырып) Динә, Динә! Ҡайҙа юғалдың һин?

Динә – Саҡыралар! Бойоҡмағыҙ! Һуңғараҡ шампанский алып сығырмын! (Суфияны кире өҫтәл артына ултырта) Ун йыл тик кенә ултырҙы ла Яңы йыл еткәс югерә башланың, тотоп та булмай үҙеңде

Суфия – Ҡайҙа юғалдың һин?

Динә – Бәҙрәфтә булдым.

Суфия – Бәҙрәф икенсе яҡта.

Динә – Ә мин урамға сыҡтым 25 йыл ауылда йәшәнем бит һаман шул ғәҙәттәремде ташлай алмайым (подъезда).

Булат – Һеҙ Яңы йылды бында ҡаршы алырға йыйындығыҙмы?

Нурия – Эйе! Ә ниңә аптырайһығыҙ?

Булат – Юҡ – юҡ былай ғына! Миңә лә һеҙҙең менән ошонда Яңы йылды ҡаршы алырға яраймы?

Нурия – Ә ниңә миңә ике ҡыш бабай, миндә икәү, ә ҡайҙалыр етмәй.

Булат – Аңланым. Китәм. Мәҙәк килеп сыҡманы (ҡаштарын, һаҡал мыйығын тартып төшөрә, ҡыҙыл танауы ғына тороп ҡала)

Нурия – Һеҙ ниңә бында стриптиз күрһәтәһегеҙ? Әле генә Ҡыш бабай ине хәҙер клоунға әйләнде.

Булат – Мин һеҙҙән ғәфү үтенергә тип килдем! Тик һеҙ борсолмағыҙ. Мин хәҙер китәм (танауын һала).

Нурия – Бөтөнләй үк сисенмәгеҙ, әле генә клоун ине – хәҙер Булатҡа әйләнде.

Булат – Мин бик ғәйепле һеҙҙең алда.

Нурия – (көлә) Сикәгә биргән өсөнме? Ғәфү үтенмәгеҙ! (көлә) Миңә һеҙгә тиклем бер кем дә сикәгә биргән юҡ ине! Был бит ҙур иҫтәлек...ниңә текләп ҡарайһығыҙ. Иҫерекме мин...шунан...Яңы йыл бит...ниңә ҡарайһығыҙ, ғәйепләйһегеҙме?

Булат – Һоҡланам! Һеҙ иҫ киткес матур! Нимә булды минең менән бөгөн.

Нурия – Әйткәндәй! Оҙон ботло ҡуянығыҙ сәләм әйтте. Ул өҙөлөп көтә һеҙҙе.

Булат – Һеҙ миңә китергә кәрәк тип әйтәһегеҙ инде.

Нурия – Юҡ мин һеҙгә китергә кәрәк тип әйтмәйем. Бары тик сәләмен генә еткерҙем.

Булат – Ә минең һеҙгә бүләгем бар.

Нурия – Минең дә һеҙгә бүләгем бар (сумкаһын аяғы менән шылдыра) Мин иҫерек, үҙегеҙ алығыҙ.

Булат – Һуңынан. Ә хәҙер рәхим итегеҙ уң ҡулығыҙҙы бирегеҙ.

Нурия – Юҡ бирмәйем (ҡулын бирә) уй (кире ала) быныһы һул ҡул икән, ә ҡайҙа һуң уң ҡулым, ә бына юҡ быныһы. Ҡайҙа әле йөрәк? Бына уң ҡулды таптыҡ, ә ниңә ул һеҙгә? О балдаҡ!

Булат – Мин ныҡ тулҡынланам! Әгәр ярамаһа балдаҡ, оҡшамаһа.

Нурия – Ниэшләп ярамаһын? (кейҙерә балдаҡты) Миңә яраны бит, оҡшай (Булат Нурияны үпмәксе була) Ой нимә булды һеҙгә?

Булат – Минең менән барыһы ла һәйбәт (курант тауыштары ишетелә) Яңы йыл менән! Яңы бәхет менән!

Нурия – Юҡҡа иғтибар итмәгеҙ (Булат Нурияны үбәм тигәндә Динә сыға фатирҙан, шампанский күтәргән, бокалдар)

Динә – Яңы йыл менән! Яңы йыл менән! Ой ҡамасауланым! Әйҙә өсәүләп шампанский эсәйек тә, мин өләсәйгә югерҙем. О, был бит атайым. Яңы йыл менән атай. Ә ниэшләп бында торабыҙ. Яңы йыл ғаилә байрамы. Уны подъезда түгел, ә өйҙә ҡаршы алырға кәрәк.

Нурия – Ысынлап та ниэшләп бында тораһығыҙ, әйҙәгеҙ өйгә.

Булат – Саҡыраһығыҙмы?

Нурия – Сумканы алығыҙ, унда һеҙгә бүләк.

Булат – Ҡайһылай ауыр! Ҡарарға мөмкинме?

Нурия – Әлбиттә.

Динә – (сумкалағы китаптарға ҡарап) Ниндәй әҙәмдәр һеҙ! Бар мөлкәтте таратырға әҙер торалар!

Булат – Мостай (китаптарҙы алып).

Нурия – Бүләк! Минән, әсәйҙән һәм Динән (фатирҙан Суфия тауышы).

Суфия – Динә! Динә! Ҡайҙа юғалдың инде тағы, бәҙрәф һул яҡта бит.

Динә – Гел һиңә ашҡынам өләсәйем (Суфияны ҡосаҡлап үбә) ҡапыл ҡапыл күп йүгермә, үҙеңде һаҡла өләсәй (Булат йәнә Ҡыш бабай костюмында Суфия янына инә).

Суфия – Өс шыршы ике ҡыш бабай (фотоға төшөрә) бабай, туғандар күрһә шаҡ ҡата саҡ

(Булат шыршыны ҡуя, Динә биҙәй, шунда уҡ шыршы ботаҡтарына ғаилә байлыҡтарын элеп ҡуя, Булат Мостайҙың китаптарын кәштәгә теҙә)

Суфия – Мин һиңә күпме әйттем Мостай тураһында (күпме?!) Әйткәндәй, һин бында нимә эшләйһең? Һин ҡайҙа һәм кем менән булырға тейешһең, ә? (Булат Ҡыш бабай кейемдәрен һала).

Булат – Яңы йыл менән Суфия ханым! Яңы бәхеттәр менән!

Суфия – (фотоаппаратын алып) кадрҙа өс шыршы һәм кәләш менән кейәү (бер туҡтауһыҙ төшөрә Динә лә Нурия менән Булат янына барып баҫа) кадрҙа ғаилә!

Динә – Мин ауырлы! Табырғамы, тапмаҫҡамы бына ҡайҙа ул мәсьәлә.

Суфия – Һин ауырлы?! Минең ейәнсәрем буласаҡ.

Нурия – Бары тик табырға! Мин...беҙ атайың менән һәр саҡ ярҙам итәсәкбеҙ.

Суфия – Мин дә ярҙам итә алам.

Булат – Беҙҙең дача ла бар, бала менән шуна йәшәрһең.

Суфия – Бигерәк йыраҡ шул, ни йылғаһы, ни урманы. Миндә һинең менән барам. Ярҙам итермен.

Динә – Яратам мин һине өләсәй!

Суфия – Иң мөһиме һин борсолма Динә, миңә күп ҡалманы инде

Динә – Өләсәй!

Нурия – Әсәй!

Булат – Ҡәйнәм!

Суфия – Юҡ-юҡ, һорамағыҙ. Булды инде күпме йәшәһәм дә шул... тағын бер 2-3 йыл...мин үлемдән ҡурҡмайым. Бер генә нимә борсой мине – баланың атаһы булырға тейеш

Нурия – Яңғыҙ әсәйҙәрҙә күп был донъяла.

Суфия – Ишеткем дә килмәй! Динә – сибәр, һылыу! Баланың атаһы булырға тейеш.

Нурия – Динә һиңә лә кейәүгә сыҡмайынса булмай инде өләсәйең шулай уйлап ҡуйған.

Булат – Балансовый отчетты бөтөргәс, барығыҙҙы ла дачаға алып барам. Барыһын да шунда хәл итербеҙ.

Динә – Ҡыш көнө дачаға.

Нурия – Унда әле йәй.

Булат – Быйыл мандарин бик уңған ти.

Суфия – Мандариндан балаға диатез булыуы мөмкин, кәрәкмәй. Беҙ Динә менән кишер, укроп, редиска ултыртабыҙ. Хәйер әкренләп йыйына башлаһаҡ та ярай. Тәү мәлдә нимә кәрәк унда, нимәләр алайыҡ икән?

Булат – Мостай!?

Суфия – Аңланым!
Булат – (кәштәнән Мостай китаптарын алып тарата барыһына ла).

ТАМАМ!